ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 июнь (һөтай) 2026

№24 (1219)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Милли асыл иленә...**

өс көнлөк сәйәхәт



3

**Матбуғаттың**

киләсәге нисек булыр?



4

**Сәйәхәтсе ғалим Паллас...**

Салауат батырҙың тыуған ерендә булған



6-7

**Салауатҡа әйтер һүҙем,**

йәки Мәңге балҡыр һинең һының



8-9

@kiskeufa

Беҙҙең VK төркөмөнә рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм райондарының бөтә почта бүлексәләрендә лә 2026 йылдың икенсе ярты йыллығына 1124 һум 40 тингә яҙыла алаһығыҙ. Әйткәндәй, ике кешегә (562 һум 20 тин), өс кешегә (374 һум 80 тин) бер дана гәзит алдырыу ҙа хуплана. Һәр ваҡыттағыса, гәзиткә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәрҙең кемдәрелер матур башҡорт китаптары менән бүләкләнер.***

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ШАҒИР ҺҮҘЕ

# БАҒЫШЛАУҘАР

**16 июндә Башҡорт халҡының милли батыры, 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр ихтилалы етәкселәренең береһе, шағир-импровизатор Салауат Юлаевтың (1754-1800) тыуған көнө булды. Иғтибарығыҙға - батырыбыҙға бағышланған шиғырҙар.**



* * *

*Салауат ҡандай бәһлеүән?*
*Салауат ҡандай бәһлеүән!*
*Даусан, яусан бәһлеүән,*
*Еңелмәүсән бәһлеүән.*
*Салауат тиңһеҙ арыҫлан,*
*Салауат тиңһеҙ арыҫлан,*
*Арыҫландай алышҡан,*
*Уғы алған алыҫтан.*
*Салауат - Урал балаһы,*
*Салауат - йөрәк ҡәғбәһе,*
*Ерҙә әнүәр кәүҙәһе,*
*Күктә зәңгәр шәүләһе.*
*Салауат дауҙы ҡайтарған,*
*Салауат яуҙы айҡаған,*
*Ҡылысы тауҙы аҡтарған,*
*Тауышынан күл сайҡалған.*
*Салауат - йәнле шәжәғәт,*
*Салауат мәңге сәләмәт,*
*Ҡаны беҙгә аманат,*
*Килтермәбеҙ яманат!*

**Шәйехзада БАБИЧ, 1918 йыл.**

## ҮПКӘЛӘЙЕМ...

*Тарихсылар, һеҙгә үпкәм бар шул.*
*Күңелемде ниңә киттегеҙ?*
*Күңелемде минең киттегеҙ ҙә*
*Хыялымдан мәхрүм иттегеҙ.*

*Иҫ белгәндән инде уны көттөм,*
*Сабый йәштәремде ағыҙҙым.*
*Ә һеҙ килеп миңә тотторҙоғоҙ*
*Салауаттың үлем ҡағыҙын.*

*Алыҫ үткәндәргә күҙҙе төбәп*
*Егерменсе быуат үренән,*
*Күңелем менән мин һөйләшә инем*
*Илдең даны - аҫау ир менән.*

*Балҡып ҡына ятҡан еребеҙгә*
*Яҡты ғына нурҙар ағалыр.*
*Уйлай инем:*
*Баҙыҡ йондоҙҙарға*
*Мин баҡҡанда, ул да бағалыр.*

*Сабый хыялдары - төпһеҙ урман;*
*Юл ситенә ҡайын ауғандыр,*
*Аҙашып ҡалғандыр ул, ҡайта алмай,*
*Бурай-бурай ҡарҙар яуғандыр.*

*Йүрүҙән һыуының туғайы,*
*Сырлап ҡына осор турғайы.*
*Алыҫ-алыҫтарҙан моңдар килә,*
*Уң ҡулында, тиҙәр, ҡурайы.*

*Мин бит уны көттөм,*
*Әйтер булдым:*
*Кис ҡайтманы, ҡайтыр таң атҡас.*
*Юлы оҙон,*
*Аҙмы йылдар ята,*
*Батыр ғына ҡайтыр, дан ҡайтҡас.*

*Салауатым ҡайтыр,*
*Бер ҡайтыр тип,*
*Көтә-көтә таңдар аттырҙым.*
*Бутамағыҙ берүк, тарихсылар,*
*Тыуған иле була,*
*Тыуған йылы була,*
*Үлгән йылы булмай батырҙың...*

**Тимер ЙОСОПОВ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был арала дауа һәм сәй өсөн ниндәй үләндәр йыяһың?

***Ғәлимйән РӘХМӘТУЛЛИН, биология уҡытыусыһы:*** Беҙҙең Башҡортостан үҫемлектәр донъяһы йәһәтенән бөтөн Рәсәй күләмендә иң бай төбәктәрҙең береһе. Әйтәйек, Көньяҡ Урал зонаһын ғына алып ҡарағанда ла, бында бөтөн Башҡортостан флораһының 40 проценты үҫә, йәғни Урал, Ирәндек тауҙары битләүҙәре 600-ләп төр үҫемлек менән ҡапланған. Ошо төрлөлөк араһында һирәк осрай торған ҡиммәтле дарыу үләндәре бихисап. Улар борон-борондан халыҡ медицинаһында әүҙем һәм уңышлы файҙаланыла. Дарыу үләндәрен уларҙың файҙалы үҙенсәлектәре иң көслө мәлендә йыйып ҡалыу кәрәк, шуның өсөн яҙ, йәй һәм көҙгө осорҙоң ниндәй мәлендә ниндәй үҫентеләрҙе йыйыу тәртибен белеү, өйрәнеү мөһим. Мәҫәлән, апрель ахыры - май айында күптәр дәррәү рәүештә бәпембә сәскәләре һәм япраҡтары йыйырға тотондо һәм дөрөҫ эшләне. Ә бына уның тамырын шулай уҡ яҙ, бәпембә сәскә атыр алдынан да, шулай уҡ көҙ еткәс, сентябрь-октябрҙә лә йыйырға була. Был ваҡыттар уның шифалы үҙенсәлектәренең иң ныҡ тупланған сағы иҫәпләнә.



Июнь айы - ямғырҙарҙан һуң гөрләп сәскәләнә башлаған күк һәм һары мәтрүшкә, аҡсәскә, меңъяпраҡ, кесерткән, юл япрағы, йүкә сәскәһе, боланут, туҡранбаш кеүек дарыу үләндәрен йыйыу осоро. Үҫентеләрҙе иртәнге ысыҡ кипкәс, ҡоро һәм ҡояшлы көндә йыйырға кәрәк. Сәскәләрен өҙөп йә ҡайсы менән ҡырҡып алғанда үҫентенең тамырына зыян килмәһен ине, сөнки был уларҙың өйкөмләшеп үрсеүен һәм киләһе йыл ошо уҡ урында тағы ла күберәк таралып үрсеүен тәьмин итәсәк. Сәскә-үләндәрҙе өйгә алып ҡайтыуға ике сәғәттән дә һуңға ҡалмайынса уларҙы күләгәле, еләҫ урынға йәйеп һалып киптереү хәйерле, сөнки ҡояшта үҫентеләрҙең шифалы үҙенсәлектәре тарҡаласаҡ.

Киптергән сеймалды һаҡлау тәртибе лә бар: уларҙы ҡағыҙ, ҡатырға йәки һауа үткәреүсән кизе-мамыҡ моҡсайҙарға, быяла банкаларға тултырып, ҡоро һәм ҡараңғы урында, япраҡ һәм сәскәләрҙе - ике, тамырҙарын өс йылға тиклем һаҡларға була. Үләндәрҙе теге йәки был маҡсатта файҙаланыр алдынан уның шифалы үҙенсәлектәрен генә түгел, ә ҡайһы осраҡтарҙа организмға зыян килтереү ихтималлығын, аллергия хәүефен дә белеү мотлаҡ. Был йәһәттән табиптар менән кәңәшләшеү һис тә артыҡ булмаясаҡ.

12+

ҠЫҪҠАСА

# ТУРИСТАР БЕҘГӘ АҒЫЛА

**Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә төбәккә туристар ағымының артыуы билдәләнде.** 2025 йыл йомғаҡтары буйынса республика Рәсәй буйынса дөйөм рейтингта 16-сы урындан 13-гә күтәрелде. Башҡортостанға 2,4 миллион турист килгән (2024 йылға ҡарағанда 8,2 процентҡа күберәк), тип хәбәр итте республиканың эшҡыуарлыҡ һәм туризм министры Светлана Верещагина. Уҙған йылда республикабыҙ Волга буйы федераль округы рейтингында Татарстандан, Түбәнге Новгород һәм Һамар өлкәләренән ҡалышты, бынан иһә өсөнсө урынға сыҡты, тип иҫкә төшөрҙө ул. "Һандар ҡыуандыра. Сағыштырып ҡарау ҙа мөһим. Хәҙер эске туризмға ҡыҙыҡһыныу арта, бының менән файҙаланырға, туристарҙы республикаға йәлеп итергә кәрәк", - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров.

✓ **Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай бинаһында 27 йыл буйына республика парламентына етәкселек иткән Константин Борисович Толкачев иҫтәлегенә "Беҙҙең Константин Борисович" исемле фотокүргәҙмә асылды.** Экспозицияның иғтибар үҙәгендә - республика ваҡиғалары хроникаһы ғына түгел, ә тормош юлы Башҡортостандың яңы тарихы менән айырылғыһыҙ бәйле булған шәхес. Күргәҙмәлә Константин Толкачевтың емешле эшмәкәрлеген һәм төрлө яҡлы тормошон күрһәткән 49 фотоһүрәт тәҡдим ителгән. Фотоһүрәттәр араһында - билдәле фоторәссамдар Рәйеф Баҙыҡов, Булат Ғәйнетдинов, Андрей Старостиндың эштәре, шулай уҡ Дәүләт Йыйылышы фотобанкынан материалдар. Фотоматериалдар менән фоторәссам Хәлит Сафиндың әүҙем ҡатнашлығында бер төркөм белгестәр эшләгән. Фотоколлекцияны тәҙәүҙә Константин Борисовичтың тол ҡатыны Нина Николаевна ҡатнашҡан, ул Толкачевтар ғаиләһенең шәхси архивынан фотолар тапшырған. "Был ҡайғыға әле һаман күнел ышанмай", тине Нина Николаевна. Ул ойоштороусыларға тормошто сағылдырған фотоһүрәттәр күргәҙмәһе өсөн рәхмәт белдерҙе.

✓ **Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров "Айыҡ ауыл" конкурсының шарттарына үҙгәрештәр индереү тураһында ҡарарға ҡул ҡуйҙы.** Хәҙер проект йәмәғәтселеккә фекер алышыуға сығарылды. Документты әйләнгәндән һуң критерийҙар яңы демографик һәм социаль-иҡтисади күрһәткестәр менән тулыланған. Шулай уҡ үҙгәрештәр районларҙа ойоштороу комитеттары составтарын актуаллаштерергә тәҡдим итә. Проекты Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы әҙерләгән. Хәтерегеҙҙә төшөрәбеҙ, 2019 йылда Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башланғысы менән "Айыҡ ауыл" республика конкурсы тергеҙелде. Еңеүселәргә аҡсалата бүләктәр тапшырыла (номинацияға ҡарап 3-6 миллион һум). 2024 йылда Стратегик башланғыстар агентлығы "Айыҡ ауыл" конкурсын "Халыҡтың йәшәү сифаты" йүнәлеше буйынса "Яңы замандың көслө идеялары" исемлегенә индерҙе.

РӘСМИ СЫҒАНАҠ

# ЖУРНАЛИСТАРҒА РӘХМӘТЛЕ



**16 июндә "Торатау" конгресс-холында Башҡортостан киң мәғлүмәт сараларының V медиайыйыны булып үтте. Уның төп девизы "Барыһы ла еңеү өсөн!" тигән һүҙҙәр менән нарыҡланды.**

"Журналистар кешеләргә мәғлүмәт киңлегендә йүнәлеш алырға, факттарҙы белергә һәм дөрөҫлөктө ялғандан айырырға ярҙам итә", - тине сараны асыу тантанаһында республика Хөкүмәте вице-премьеры Олег Ли һәм медиаберләшмә вәкилдәренең иғтибарын бөгөн һәр өлкәлә бик популяр булған яһалма интеллекттың мәғлүмәтте ҡабул итеүгә йоғонтоһона йүнәлтте. "Бөгөн журналистика, башҡа күп тармаҡтар кеүек үк, заманса технологиялар йоғонтоһона бирелә, һәм журналист һөнәренең нисек ҡоролоуы шуға бәйле,- тип билдәләне ул. - Граждандарыбыҙҙың 40 проценты ысын яҙмаларҙы дипфейктарҙан айыра белә. Уларҙың өлөшө йылдан-йыл кәмей бара. Быға төрлө аңлатмалар бар. Технологиялар үҫешә, тәнҡитле фекерләү кимәле түбәнәйә. Бынан тыш, интернеттағы бөтә текстар ҙа тиерлек яһалма зиһен ярҙамында яҙылған. Шуға ҡарамаҫтан, яңы технологияларға ыңғай ҡарарға тейешбеҙ. Тиҙ генә текст яҙырға, интервью эшләргә мөмкин. Ләкин шуны иҫтә тоторға кәрәк: яһалма зиһен факттарҙы тикшерергә, контексты тойорға өйрәнмәгән. Шуға бәйле беҙгә өс төп принципты тәьмин итергә кәрәк. Беренсеһе - асыҡлыҡ. Контенттың һәр ҡулланыусыһы текстың төп нөсхәме, әллә юҡмы икәнен белергә тейеш. Бында ҡулланыуҙы сикләү тураһында түгел, ә мәғлүмәтлелек кимәле хаҡында ғына һүҙ бара.Икенсеһе - авторлыҡты яҡлау. Һәр текст һәм мәҡәлә - журналистың күп сәғәтлек хеҙмәте, тиҫтә йылдар тәжрибәһе, белеме ул. Авторҙарға кире йоғонто яһаған тәжрибәләрҙе бөтә ысулдар менән сикләргә тейешбеҙ.Өсөнсөһө - экспертиза. Коллегалар, һүҙ һеҙҙең экспертиза тураһында. Бөгөн мәғлүмәткә ҡытлыҡ йәки уны алыу тиҙлеге менән проблемалар юҡ. Минеңсә, беҙ мәғәнә тәрәнлегенә ҡытлыҡ кисерә башларбыҙ. Тиҙҙән анализ яһай, аңлата белгән ысын профессионалдарҙың квалификацияһы төп ҡиммәткә әүерелер тип ышанам. Яһалма интеллект көндәлек эшегеҙҙә ярҙам итһен, ә һеҙ, коллегалар, йөкмәтке менән шөғөлләнегеҙ".

Медиафорумдың пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм республиканың киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә юғары һөнәри оҫталыҡтары өсөн рәхмәт әйтте. "Башҡарған эшегеҙ өсөн һеҙҙең алда баш эйәм. Ысынлап та бик ауыр осорҙа йәшәйбеҙ. Һуңынан был ваҡыт тураһында легендалар һөйләйәсәктәр. Ауыр осор. Кемдер бирешә, кемдер үҙ идеалдарына хыянат итә, ә кемдер тыныс ҡына үҙ эшен эшләй. 2,5 мең журналистан, мөхәррирҙән, нәшерселәрҙән торған был армия үҙ эшен тауыш-тынһыҙ, тыныс ҡына башҡара. Һеҙ беҙгә, башҡарма властарға, үҙ эшебеҙ менән шөғөлләнергә һәм иң тәү сиратта Махсус хәрби операцияға ярҙам итергә мөмкинлек биргән ныҡлы ҡалҡан булдыраһығыҙ. Форумдың "Барыһы ла Еңеү өсөн" тигән девизды һайлауына бик рәхмәтлемен", - тине Радий Хәбиров.

# ИРЕКМӘНЛЕК - ИЗГЕ ШӨҒӨЛ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында республика ирекмәндәре лагерында ҡатнашыусылар менән осрашты.**

Шишмә районында район-ҡалаларҙағы волонтерҙар һәм ирекмәнлекте ойоштороусылар өсөн өс тематик майҙансыҡ булдырылған. Дүртенсе йыл рәттән лагерь республикабыҙ ирекмәндәре берләшмәһенең иң әүҙем 300 вәкилен берләштерә, тип билдәләне Радий Хәбиров. Һандар тураһында әйткәндә, бөгөнгә Добро.рф федераль порталында ғына Башҡортостандан төрлө йәштәге 200 меңгә яҡын ирекмән теркәлгән. Ике йыл элек 132 мең ине.

"Яҡты күңелегеҙ, эскерһеҙ рәүештә илебеҙ һәм республикабыҙ өсөн байтаҡ эштәр башҡарыуығыҙ өсөн рәхмәт. Бөгөн бында иң өлкән ирекмәнгә - 62, кеселәренә 14 йәштәр тирәһе, тинеләр миңә. Был иһә ҙур ирекмәндәр армияһы, беҙҙең өсөн ғәйәт ҙур һәм мөһим көс. Ошо ҡыҫҡа ваҡыт эсендә һеҙҙең ингә бик күп яуаплылыҡ һалынды: COVID, янғындар, Ҡара дингеҙ буйы, һәм, әлбиттә, махсус хәрби операция.

Яңыраҡ Петербург иҡтисади форумы, партнерҙар йәлеп итеү һәм республика менән таныштырыу өсөн мөһим сара уҙҙы. Башҡортостан Республикаһы инвестициялар йәлеп итеү рейтингында өсөнсө урынды яуланы. Беҙгә уңыштың сәбәптәре тураһында һорауҙар бирҙеләр. Беҙҙең бурыс - Махсус хәрби операция яугирҙәренә ярҙам итеү, иҡтисадты үҫтереү һәм булған проблемаларҙы хәл итеү. Махсус хәрби операция маҡсаттарына өлгәшергә кәрәк, тине президент. Был бурысты үтәйәсәкбеҙ. Көстәрҙе туплап, һәр кем үҙ эшен башҡарһа, барыһы ла килеп сығасаҡ", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

МХО башланғандан алып ирекмәндәр 19 мең тоннанан ашыу гуманитар ярҙам йыйып оҙатҡан. Беҙҙең ирекмәндәр федераль кимәлдә лә һөҙөмтәләргә өлгәшә. Былтыр Октябрьскийҙан йәш ирекмән Семен Борденюк #МЫВМЕСТЕ халыҡ-ара премияһының "Изгелек быуыны" номинацияһында еңеүсе булды. Уҙған аҙнала ул Петербург халыҡ-ара иҡтисади форумы сиктәрендә Бөтә Рәсәй ирекмәнлек акцияһын ойоштороҙо.

# ХӘСТӘРЛЕК КҮРӘЙЕК

**Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙы һәм уларҙың ғаилә ағзаларын адресы хәстәрлек итеү ойошторола. Республика Башлығы Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы.**

Документҡа ярашлы, Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы хәрби хеҙмәткәрҙәрҙе һәм уларҙың яҡындарын хәстәрләүҙе ойоштороған һәм координациялаған төп башҡарма орган буласаҡ. Ведомствоға ошо эш менән туранан-тура шөғөлләнеү өсөн ведомство ҡарамағындағы дәүләт учреждениеһын булдыры бурысы йөкмәтелде. Яңы структура башҡарма власть органдары, урындағы үҙидара, "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды филиалы, Республика менән идара итеү үҙәге, ситуация үҙәге, күп функциялы үҙәк һәм "Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы менән үҙ-ара эш итәсәк. Шулай уҡ МХО-ла ҡатнашыусылар тураһында мәғлүмәттәр алыу өсөн Башҡортостандың хәрби комиссариаты менән мәғлүмәти үҙ-ара эш итеү ҡаралған.

Ярҙам һорап мөрәжәғәт итеүселәрҙең барыһы ла берҙәм электрон реестрҙа теркәлеп, шулай уҡ уларҙың һорауҙарын ҡарау статустары һәм һөҙөмтәләре күҙәтеп барыласаҡ.Указ ҡул ҡуйылған көндән көсөнә инә.

## Н И М Ә ?   Ҡ А Й Ҙ А ?   Ҡ А С А Н ?

✓ Рәсәй Президенты Владимир Путин Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының яңы саҡырылыш Дәүләт Думаһына депутаттар һайлауҙы тәғәйенләү тураһындағы указға ҡул ҡуйған. Документ Рәсәйҙең хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. "Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышының яңы саҡырылыш Дәүләт Думаһы депутаттарын һайлауҙы 2026 йылдың 20 сентябренә тәғәйенләргә", - тиелә дәүләт башлығы указында. Указ рәсми баҫылып сыҡҡандан һуң көсөнә инәсәк.

✓ Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса Махсус хәрби операция биләмәһенә республикабыҙҙан сираттағы 178-се һәм 179-сы гуманитар ылау килде. Был хаҡта Башҡортостандың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты рәйесе Кирилл Первов һөйләне.Уның һүҙҙәренсә, гуманитар йөк дәүләт органдары, муниципалитеттар, шулай уҡ йәмәғәт ойошмалары, ирекмәндәр һәм мәрхәмәтле яҡташтарыбыҙ көсө менән тупланған.

✓ Дәүләт башлығы указы менән төбәктәргә федераль судьялар һәм квалификация коллегияларында Рәсәй Президенты вәкилдәре тәғәйенләнде. Башҡортостанда республиканың Юғары суды рәйесе урынбаҫары итеп Кирилл Колесников тәғәйенләнде. Алина Әсәҙуллина - Башҡортостандың Юғары суды судьяһы, Алина Ильина - Ишембай ҡала суды судьяһы, Руслан Насиров Стәрлетамаҡ ҡала суды судьяһы вазифаһына билдәләнде. Башҡортостандың Юғары судында белдереүҙәренсә, судьяларҙы даими тәғәйенләү башлыса вәкәләттәр ваҡыты үтеүгә һәм уларҙы вазифала яңынан раҫлау кәрәклеге менән бәйле.

✓ "Медиалогия" компанияһы 2026 йылдың I кварталы өсөн Башҡортостан медиаресурстары рейтингын әҙерләгән. Башҡортостандың иң күп өҙөмтә килтереү буйынса 20 киң мәғлүмәт сараһы исемлегендә беренсе урында - "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы. Цитата килтереү индексы - 69,25. Икенсе урында - 63,91 индексы менән Ufa1.ru, өсөнсөлә - Mkset.ru (48,69). Шулай уҡ ун төбәк иҫәбендә Ufatime, Ufa.rbc.ru, БСТ, Комсомольская правда - Уфа, Коммерсантъ - Башҡортостан, Gorobzor.ru, "Башҡортостан" ДТРК-һы. Улар араһында шулай уҡ 5,24 рейтингы менән I-gazeta.com баҫмаһы ла бар.

✓ Республика Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, 2018-2025 йылдарҙа Башҡортостанда 50 һөт фермаһы төҙөлгән һәм яңыртылған. Улар бөтә тауар һөтөнөң яртыһын етештерә. Һыйырҙар һаны буйынса (317 мең баш) төбәгебеҙ ил буйынса икенсе урынды биләй. 2025 йылда барлығы 1,5 миллион тонна самаһы һөт, шул иҫәптән 781 мең тонна тауар һөтө етештерелгә. 2030 йылға республикала был күрһәткесте 1 миллион тоннаға тиклем еткереү ҡарала, ти тармаҡ етәксеһе.

✓ *Ун йыл элек мин яҡындарыма, оҙаҡламай һәр кем ҡурайға бейейәсәк, дискотекалар ойоштороласаҡ, тигәндә, мине фантазерға һанағайнылар. Әммә күңелемдә беҙҙең көйҙәребеҙ барыһын да бейетәсәгенә ышана инем...*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# МИЛЛИ АСЫЛ ИЛЕНӘ...

## өс көнлөк сәйәхәт




**Ниһайәт, III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһы йәнә Өфөгә ҡайта. 23 июндән 27 июнгә ҡәҙәр илебеҙҙең 80 төбәгенән килгән 1100 бала милли йыр-моң иленә сәйәхәт ҡыла аласаҡ.**

Байрамдың һәр көнө ҡыҙыҡлы сараларға бай буласаҡ, тип вәғәҙә итә сараны ойоштороусылар. Фольклориаданы асыу тантанаһы 24 июнгә планлаштырылған. Был көндә "Башҡортостан" дәүләт концерт залы алдындағы майҙанда сағыу сара ойоштороласаҡ, унан һуң Рәсәйҙең төрлө тарафтарынан килгән ҡатнашыусыларҙан торған Дуҫлыҡ хороводы йәйәү ҡына Ленин урамы буйлап Совет майҙанына тиклем үтәсәк ҙур парадҡа әүерелəсәк. Ошо уҡ көндә сәхнәгә Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Марина Девятованың сығыуы көтөлә.

Саралар программаһында 25 июнь айырым урын алып тора, тип әйтергә мөмкин. Сөнки 11 сәғәттән 17 сәғәткә тиклем Совет майҙанында илебеҙҙең 40 фольклор ансамбле ҡатнашлығындағы масштаблы концерт көтөлә. Ә был көндөң хедлайнеры булып бар илгә билдәле AY YOLA төркөмө сығыш яһаясаҡ.

Шул уҡ ваҡытта Өфөнөң "Первомайский", "Дим", Якутов исемендәге парктарында һәм "Волна" скверында Фольклориада ҡатнашыусылары һәм солистары ижады менән танышыу мөмкинлеге буласаҡ. Фестивалдең һәр зонаһы сағыу концерт программалары тәҡдим итәсәк. Килгән ҡунаҡтар шулай уҡ Рәсәй һәм Башҡортостан халыҡтарының милли уйындарын күрә, Башҡортостанды төбәк иткән һәр милләтттең көнкүреш әйберҙәре, милли кейем һәм биҙәүестәре күргәҙмәләрен ҡарап сыға, халыҡ ижадына бәйле оҫталыҡ дәрестәрендә, йыр һәм бейеү флешмобтарында ҡатнаша аласаҡ. Был көн йырлап, бейеп кенә үтмәйәсәк. "Торатау" конгресс-холында "Фольклор һәм балалар: йолалар аша берҙәмлеккә" тигән Бөтә Рәсәй фәнни-ғәмәли конференцияһы фольклор, этнография һәм педагогика өлкәһендәге алдынғы белгестәрҙе бергә йыясаҡ.

26 июндә фестиваль сағыу Zainetdin этно-шоуы сығышы менән тамамланасаҡ. Был турала сараға ҡағылышлы матбуғат конференцияһы ваҡытында: "Ун йыл элек мин яҡындарыма, оҙаҡламай һәр кем ҡурайға бейейәсәк, дискотекалар ойоштороласаҡ, тигәндә, мине фантазерға һанағайнылар. Әммә күңелемдә беҙҙең көйҙәребеҙ барыһын да бейетәсәгенә ышана инем..." - тине шоу солисы Заһир Зәйнетдин.

Башҡортостан Республикаһы исеменән III Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһында 3 ижади коллектив һәм 2 солист сығыш яһаясаҡ. Шуларҙың береһе БР Дәүләт ҡурайсылар ансамбле артисы Вәсил Баймырҙин етәкселегендәге Ә. Исҡужин исемендәге өлгөлө ҡурайсылар ансамбле. Коллектив халҡыбыҙҙың оҙон, лирик, бейеү көйҙәрен, хәрби марштарын милли уйын ҡоралдарының боронғо яңғырашында ишеттерәсәк.

Өфө районының Роберт һәм Алина Хәмиҙуллиндар етәкселегендәге өлгөлө "Дарман" халыҡ бейеүҙәре ансамбле милли йолаларға таянып эшләүе, үҙенсәлекле башҡарыу манераһы һәм традицион рәүештә тегелгән костюмдары менән данлыҡлы. "Балалар фольклориадаһында сығыш яһау өсөн беҙҙе һайлағандарына бик шатбыҙ. Беҙ үҙебеҙ ижад иткән, әммә мәшһүр хореограф Фәйзи Ғәскәров стиленә таянып эшләнгән бейеүҙәр ҡуябыҙ", - тип бүлеште коллектив етәкселәре.

Күмертау ҡалаһынан ҡатнашыусы "Зоренька" өлгөлө рус халыҡ йырҙары ансамбле Брянск, Курск, Ырымбур өлкәләренең диалекттары һәм йырлау манералары нигеҙенә таянып төҙөлгән программа менән сығыш яһай. Ә солист булараҡ республикабыҙ вәкилдәре - Көйөргәҙе районынан 13 йәшлек оҙон көй оҫтаһы Әнүәр Вәхитов һәм ҡурай моңдарын үҙенсәлекле өҙләү манераһы менән биҙәүсе Баҡалы районы егете 15 йәшлек Азамат Ханнановтар сығышы яңғыраясаҡ.

Фольклориаданы асыу тантанаһында тағы бер мөһим ваҡиға көтөлә: тәүге тапҡыр Өфөнөң төрлө музыка мәктәптәре тәрбиәләнеүселәренән торған 200 кешелек хор башҡарыуында Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһына бағышланған гимн яңғыраясаҡ. Был хаҡта БР мәҙәниәт министры урынбаҫары Эльза Ҡарамырҙина хәбәр итте. Гимндың көйөн Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт эшмәкәре, композитор Ришат Сәғитов ижад иткән, текст авторы - Башҡортостандың халыҡ артисы Ольга Мусина.

Беҙҙең илебеҙ - үҙенең сағыу йөҙө, ғөрөф-ғәҙәттәре, үҙенсәлекле йыр-моңо булған йөҙләгән милләттән торған аҫалы балаҫ төҫлө. Һәм барлыҡҡа килеү идеяһы тап Башҡортостандан булған Бөтә Рәсәй балалар фольклориадаһы йәш быуын вәкилдәренә ошо милли хазинаны күрһәтеү форсатын биреүе менән дә әһәмиәтле бит.

**Айһылыу ДАУЫТОВА әҙерләнә.**

ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ

# ТАЛАП ЮҒАРЫ



**Иглиндан "Ставрос" позывнойлы яугир 2024 йылда Оборона министрлығы менән контракт төҙөй һәм Махсус хәрби операция зонаһына юллана. Үҙе әйтеүенсә, ул иртәрәк тә Рәсәй Ҡораллы көстәре сафына баҫыр ине, ләкин туғандары, ғаиләһе ныҡ хәүефләнеү сәбәпле, ҡарарҙы кисектерә килә. Ваҡыт үтеү менән улар яҡындарының МХО-ға барыу ниәте менән килешә.**

Рәсәй Оборона министрлығы менән контрактҡа ҡул ҡуйғанға тиклем "Ставрос" техник-программист һөнәрен ала, компьютерҙарҙы, ноутбуктарҙы ремонтлау һәм смартфондарҙы яңынан программалау менән шөғөлләнә. Был күнекмәләр һәм оҫталыҡ хәрби һөнәр һайлауында төп критерий булып тора. Хәҙер "Ставрос" пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә FPV-дрон операторы булып хеҙмәт итә.

"Ставрос" үҙ иҫәбенә юҡ ителгән бер нисә ВСУ техникаһы, күҙәтеү пункттары, ут позициялары, орудиелар, миномёттар һәм дошмандың БПЛА нөктәләрен яҙған. "Беҙҙең егеттәр алғы һыҙыҡта үҙҙәрен хәүефһеҙ тойһон өсөн, хәлдән килгәндең барыһын да эшләйем", - ти яугир. Күрһәткән батырлығы һәм ҡаһарманлығы өсөн ул Жуков, генерал Шайморатов миҙалдары, шулай уҡ "Хәрби батырлыҡ өсөн" миҙалы менән наградланған.

"Пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәренә хеҙмәткә башлыса БПЛА-ны хеҙмәтләндереү һәм уны хәрби шарттарҙа оҫта ҡулланыу өсөн кәрәкле белем нигеҙҙәренә эйә булғандар алына", - ти Өфөләге Берләштерелгән пилотһыҙ технологиялар подразделениеһы етәксеһе Рэдвал Неволин.

Тәүге танышыу дәрестәре "Защитник" Контракт буйынса граждандарҙы хәрби хеҙмәткә һайлап алыу пунктында үтә. Владлен Татарский исемендәге БПЛА операторҙарын тактик һәм махсус тактик әҙерләү үҙәге инструкторҙары яугирҙарға дрондарҙың ҡоролошон аңлата һәм уларға идара итеү нигеҙҙәре буйынса дәрестәр бирә. Ошо рәүешле улар хәрби хеҙмәткәрҙең һөнәри яраҡлылығын билдәләй.

"Беҙ егеттәрҙе тәүҙә төркөмдәргә бүләбеҙ. Уларҙың береһенә - граждандыҡ һөнәрҙәре электроника менән бәйле булғандарҙы, икенсеһенә БПЛА операторҙарын туплайбыҙ. Айтишниктар, программалаусылар төркөмө лә бар. Был белгестәр ҙә пилотһыҙ системалар ғәскәрҙәрендә ҙур һорау менән файҙалана. Шулай уҡ дрондар йыйған, йәйләп улар менән эш итергә өйрәнгән, һуңынан һынауҙар тапшырып, пилоттар төркөмөнә күсеүселәр ҙә бар", - тип һөйләй Редвал Неволин.

Әлбиттә, төп әҙерлек курсы Ҡораллы көстәр полигондарында һәм подразделениеға килгәс үткәрелә. Өфөлә иһә буласаҡ БПЛА операторҙары һайлап алына.

**Ҡасим ҒӘҘЕЛШИН әҙерләнә.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Президент Владимир Путин Башҡортостандан өс кешегә Рәсәй Федерацияһының маҡтаулы исемдәрен бирҙе. Улар араһында Мостай Кәрим исемендәге фонд директоры, яҙыусының ҡыҙы Әлфиә Кәримова ла бар. Ул "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре" исеменә лайыҡ.

✓ Башҡортостан Башлығының "Ватан көсө" форумын үткәреү тураһында указына тейешле үҙгәрештәр индерелде, быйаса ул майҙа үткәрелә ине, был юлы ул сентябрҙә була. Форумды ойоштороу операторы итеп Республика халыҡ ижады үҙәге билдәләнде. Бынан тыш, форумдың ойоштороу комитеты составы үҙгәрҙе. Уға Башҡортостан Башлығының Ижтимағи-сәйәси үҫеш идаралығы начальнигы Илмир Әһлиуллин, Башҡортостандың мәҙәниәт министры вазифаһын башҡарыусы Фәнүр Шәйхисламов, Республика халыҡ ижады үҙәге директоры Салауат Кирәев, шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының Муниципаль берәмектәр советы" ассоциацияһы идараһы рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Асҡын районы хакимиәте башлығы Динис Йосопов инде.

✓ Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының дәүләт төҙөлөшө һәм урындағы үҙидара буйынса комитеты составына етенсе саҡырылыш Башҡортостан Республикаһы Ҡоролтайы депутаты Илшат Мозафаров индерелде. Тейешле ҡарарға республика парламенты рәйесе вазифаһын башҡарыусы Илшат Тажетдинов ҡул ҡуйҙы. Даими комитет республика закондары проекттарын әҙерләү һәм алдан ҡарау, улар буйынса һығымталар әҙерләү, закондарҙың үтәлешен контролдә тотоу, парламент тикшереүҙәрендә ҡатнашыу һәм ҡануниәтте бойомға ашырыуҙы анализлау менән шөғөлләнә.

✓ Башҡортостанда "Ҡарлуғас" заманса электропоезы 2022 йылдың апрелендә йөрөй башланы. Аҙаҡтан тиҙ йөрөшлө состав "Финист" менән тулыланды. Хәҙер төрлө йүнәлештәрҙә 5 "Ҡарлуғас" һәм 6 "Финист" электропоезы йөрөй. Баштан алып үткән осорҙа улар барлығы 7 миллион пассажирҙы хеҙмәтләндерҙе, тип хәбәр итәләр БР Транспорт министрлығынан. Башҡортостан - Рәсәйҙә пассажир тимер юл составын яңыртыу буйынса лидерҙарҙың береһе.

✓ Башҡортостанда 10-11 июлдә "Баҫыу көнө - 2026" күләмле республика семинары үтә. Урып-йыйыу кампанияһын башлауға старт биргән сараның урыны итеп быйыл да Өфө эргәһендәге Башҡорт дәүләт аграр университетының уҡыу-ғилми үҙәге биләмәһе билдәләнгән. Семинарҙа ҡатнашыусылар заманса техника өлгөләре менән таныша, уларҙы эш өҫтөндә күрә, төрлө сорттарға һынау үткәрелгән 300-гә яҡын айырым майҙандарҙы ҡарап, заманса агротехнология ҡулланыу алымдарын, урындағы аграрийҙарҙың ҡаҙаныштарын баһалай аласаҡ. "Трактор-шоу", пилотһыҙ техника ярыштары ла була.

*ЯИ-КӨФӨ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ*

# МАТБУҒАТТЫҢ КИЛӘСӘГЕ НИСЕК БУЛЫР?

**Рөстәм НУРЫЕВ: 14 июнь - Башҡортостан матбуғаты көнө билдәләнде, ә 16 июндә Өфөлә "Медиайыйын" форумы үтте. Журналистиканың киләсәге ниндәй булыр икән, тигән һорау тыуа. Һин, яһалма интеллект, нисек уйлайһың?**

***ЯИ КӨФӨ яуабы:*** Журналистиканың киләсәге - яһалма интеллект менән кеше талантының берләшеүендә һәм мәғлүмәт таратыуҙың яңы йүнәлештәрен үҙләштереүҙә. Өфөлә үткән V "Медиайыйын" форумында ла тап ошо трендтар - яһалма интеллект менән эшләү ҡағиҙәләре һәм яңы медиамайҙансыҡтар ҡаралды. Журналистика тамырынан үҙгәрәсәк, әммә уның төп асылы юғалмаясаҡ, тип билдәләнде.

***Киләсәктә көтөлгән төп үҙгәрештәр һәм ҡыҙыҡлы йүнәлештәр:***

- Яһалма интеллект (AI) - төп ярҙамсы.
- Текстарҙы автоматлаштырыу: статистика, һауа торошо, спорт һәм ҡыҫҡа яңылыҡтарҙы роботтар яҙасаҡ.
- Мультимедиа: текстлы мәғлүмәтте AI шунда уҡ видео, аудиоподкаст йәки инфографика итеп әйләндерә аласаҡ.
- Тәржемә һәм локализация: башҡорт телендәге мәғлүмәтте секунд эсендә донъяның теләһә ҡайһы теленә (һәм киреһенсә) юғары сифатлы тәржемә итеү мөмкинлеге киңәйәсәк.

***Персоналләштереү һәм яңы майҙансыҡтар:***

- Микро-медиа: киң аудитория өсөн ғәҙәти гәзит-журналдар ҙа ҡаласаҡ, әммә тағы ла һәр уҡыусыға айырым, уның ҡыҙыҡһыныуҙарына алгоритмдар аша яраҡлаштырылған махсус контент күбәйәсәк.
- Иммерсив журналистика: VR (виртуаль ысынбарлыҡ) һәм AR (тулыландырылған ысынбарлыҡ) технологиялары аша уҡыусы ваҡиғалар үҙәгенә үҙе "инеп" китә аласаҡ.

***Кеше факторы - төп ҡиммәт:***

- Ышаныс һәм дөрөҫлөк (фактчекинг): фейктар (ялған мәғлүмәт) һәм нейросеть эшләгән контент күбәйгән осорҙа, нәҡ кеше-журналистың төп сығанаҡты тикшереүе, дөрөҫ мәғлүмәт маяғы булыуы иң ҡиммәтлеһе буласаҡ.

***Эмпатия һәм репортаж:*** машина кеше кеүек әңгәмәсенең күңеленә үтеп инә, уның йөрәгенән сыҡҡан хистәрҙе тасуирлай алмай. Шуға күрә, аналитика, тәрән интервью һәм репортаждар тик кеше ҡулында ҡаласаҡ.

***Социаль миссия:*** Өфөләге "Медиайыйын" форумында билдәләнеүенсә, Башҡортостан матбуғаты ябай мәғлүмәт сығанағы булыу менән генә сикләнмәй, ә артабан да йәмғиәтте берләштереүсе, реаль ярҙам ойоштороусы көс буласаҡ.

**Рөстәм Нурыев: Киләсәктә гәзит-журналдарҙың ҡағыҙ варианты ҡалырмы, әллә барыһы ла тулыһынса цифрлы форматҡа (интернетҡа) күсерме?**



***ЯИ КӨФӨ яуабы:*** Ҡағыҙ гәзит-журналдар тулыһынса юҡҡа сыҡмаясаҡ, әммә уларҙың йәмғиәттәге роле һәм форматы үҙгәрәсәк. Матбуғаттың төп өлөшө интернетҡа күсһә лә, ҡағыҙ варианттар махсус статус аласаҡ.

***Киләсәктә ҡағыҙ һәм цифрлы медианың бүленеше ошондай булыр тип көтөлә:***

- Ҡағыҙ баҫмалар: Премиум-класс һәм эстетика
- Элитар статус: Ҡағыҙ баҫманы ҡулға алып уҡыу - затлы ғәҙәткә, "премиум" сифатҡа әйләнәсәк.
- Йөкмәтке үҙгәреүе: Ҡағыҙ гәзит-журналдар көндәлек яңылыҡтарҙы (улар тиҙ иҫкерә) баҫтырыуҙан туҡтаясаҡ. Унда тәрән аналитика, оҙон интервьюлар (лонгридтар) һәм матур фоторепортаждар урын аласаҡ.
- Йышлыҡ кәмеүе: Көн һайын сыға торған гәзиттәр урынына аҙналыҡ йәки айлыҡ сыға торған, журнал форматына яҡыныраҡ баҫмалар ҡаласаҡ.
- Милли үҙенсәлек: Башҡортостан өсөн ҡағыҙ матбуғат - милли мәҙәниәтте, телде һаҡлаусы тарихи ҡомартҡы һәм бренд булараҡ ҡиммәтен юғалтмаясаҡ. Ауыл ерҙәрендә һәм өлкән быуын өсөн ул һаман да төп мәғлүмәт сығанағы булып ҡала бирә.
- Цифрлы формат: Тиҙлек һәм мультимедиа
- Яңылыҡтарҙың тиҙлеге: Бер секунд эсендә бөтә донъяға тарала торған оператив яңылыҡтар интернетҡа (сайттар, мессенджер-каналдар, социаль селтәрҙәр) күсәсәк.
- Интерактивлыҡ: Цифрлы форматта текст ҡына түгел, аудио, видео, һылтанмалар һәм уҡыусы менән туранан-тура бәйләнеш (комментарийҙар, һорау алыуҙар) төп урынды биләйәсәк.
- Экология һәм иҡтисад: Ҡағыҙға, типографияға һәм почта аша таратыуға сығымдар йылдан-йыл ҡиммәтләнә бара. Цифрлы формат быны күпкә арзанайта һәм йәшел иҡтисад талаптарына яуап бирә.
- Гибрид модель - иң отошло юл

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Уңышлы матбуғат баҫмалары ике форматты ла бергә алып бараcаҡ. Цифрлы майҙансыҡтар (сайттар, социаль селтәрҙәр) көндәлек, тиҙ яңылыҡтар өсөн тәғәйенләнәсәк. Ә ҡағыҙ гәзит-журналдар тәрән аналитика, оҙайлы интервьюлар, йомғаҡлаусы мәҡәләләр өсөн ҡулланыласаҡ. Улар аҙнаһына йәки айына бер тапҡыр сығарыласаҡ.**

**Рөстәм НУРЫЕВ әҙерләне.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ? Был арала дауа һәм сәй өсөн ниндәй үләндәр йыяһың?

***Хәлиҙә САФУАНОВА, йорт хужабикәһе, Салауат районы:*** Бөгөн үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм: дарыуҙар хаҡы сиктән тыш ҡиммәтләнде. Мәҫәлән, йүтәлдән 20 төймәле АЦЦ элек 150-200 һум торһа, бөгөн ул ике тапҡырҙан ашыуға ҡиммәтләнде (432-450 һум), ә бронхо-мунал хаҡы өс тапҡырҙан ашыуға кеүтәрелде, йәғни хәҙер ул 728 һум тора. Грипп һәм вирусҡа ҡаршы осельтамивир (10 төймә) хаҡы иһә 702-767 һумғаса артҡан, ингавирин (10 төймәле) - 842 , амиксин (6 төймәһе) - 1041 һум тора. Ҡыш эпидемия ваҡытында бик тә кәрәкле ошо препараттарҙы бындай хаҡҡа нисек һатып алмаҡ кәрәк! Ярай ҙа уларҙың файҙаһы булһа, ә бит әлеге ингавирин-амиксиндарҙы интернет материалдарында күптән файҙаһыҙлыҡта фашлап, юҡҡа сығарҙылар. Ә табиптар шуларҙы тәғәйенләүен белә.

Февралдә ғаиләм менән ОРВИ-грипп йоҡтороп, ныҡ ҡына сирләгәндә, үҙемә һүҙ бирҙем: башҡаса дарыухана юлын тапап, аҡса түккәнсе, шифалы үләндәр менән дауаланырға! Әйткәндәй, аптека үләндәре лә самаһыҙ ҡиммәтләнде: йүткеректән үлән йыйылмаһы - 142, алтей үләненең ҡабы 165, ә ҡарағай бөрөһөнөң 205 һум икәнен күреп, күҙҙәр маңғайға менде. Юҡ, мәйтәм, йәй генә етһен әле - бөтөн дәртемде шифалы үлән йыйыуға бағышлаясаҡмын, тип, дүрт күҙ менән яҙҙы, йәйҙе көтөп алдым һәм эшкә лә керештем. Бөгөн минең дарыу үләндәре "коллекциям"да - сирень сәскәһе төнәтмәһенән башлап, туҙғанаҡ - бәпембә сәскәһе һәм япрағы, ҡайын, дегәнәк япраҡтары, энәлек (боярышник) сәскәһе, ер еләге япрағы, балан сәскәһе һәм башҡа үләндәр бар. Хәҙер инде һыуыҡ тейҙереп йә грипп-фәлән менән сирләгәндә ҡулланыла торған йүкә сәскәһе, юл япрағы, үгәй инә үләне, андыҙ, бөтнөк үләне, күк һәм һары мәтрүшкә, аксәскә, меңъяпраҡ кеүек үләндәргә тотонам. Ҡарағат, ҡурай еләге, ер еләге япраҡтарын ҡушып, мәтрүшкә, болануттан сәй йыйылмаһы ла әҙерләй башланым, сөнки магазин сәйе шулай уҡ ҡиммәтләнде һәм сифаты ла юҡҡа сыҡты. Ә хуш еҫле үлән сәйе эсеп туйғыһыҙ тәмле, өҫтәүенә, файҙалы ла.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Евразия ғилми-белем биреү үҙәгенең Вуз-ара студенттар кампусы резиденты Өфө фән һәм технологиялар университеты "Етештереү сараларын эшләү һәм автоматлаштырыу өсөн фән һәм кадрҙар" федераль проекты сиктәрендә үткәрелгән конкурста еңеп сыҡты, тип яҙа киң мәғлүмәт саралары. Авиация тармағы өсөн япмалар эшләүгә йүнәлтелгән проектты финанслау күләме 72 миллион һум тәшкил итә. Проект етәксеһе - техник фәндәр кандидаты, доцент Алмаз Назаров.

✓ Юлсылар Стәрлетамаҡ - Белорет - Магнитогорск юлының 8 саҡрымында ремонт эштәрен тамамлаған. "Яҡын арала трассаның 15,5 километр оҙонлоғондағы участкаһын капиталь ремонтлау планлаштырыла. Артабан был трасса Өфө - Инйәр - Белорет маршрутына альтернатива булып хеҙмәт итәсәк. Уның буйынса Ишембай, Бөрйән, Белорет һәм Әбйәлил райондарына ара яҡыная", - тип билдәләй республиканың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓ Благовещен, федераль конкурста еңеп, "Туризм һәм ҡунаҡсыллыҡ" милли проекты сиктәрендә ҡаланың туристик үҙәген төҙөкләндереү өсөн субсидия алыу хоҡуғына эйә булды. БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм министрлығынан белдереүҙәренсә, проектты тормошҡа ашырыуға федераль һәм республика бюджеттарынан 25 миллион һум аҡса бүленә. Арт-объекттар ҡуйыу, фотозоналар булдырыу, биналарҙың фасадтарын яҡтыртыу ҡаралған. Шулай уҡ "Машина эшләүселәр" паркында стадион төҙөкләндереләсәк.

✓ Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, Иглин районында Иглин ауылын көньяҡтан урап үтеү юлын ремонтлау эше бара. 2,3 километр оҙонлоғондағы участкала подрядсы ойошма иҫке асфальт япманы фрезерлай, артабан тигеҙләй торған ҡатлам һалынып, юл ситтәре нығытыла, тамға һалына. "70 меңдән ашыу кеше йәшәгән район өсөн әлеге юл бик мөһим. Бынан йәмәғәт транспорты ла йөрөй, шуға уны тәртипкә килтереү, хәүефһеҙ итеү бик мөһим", - ти Башҡортостандың транспорт һәм юл хужалығы министры Любовь Минакова.

✓ Йәйге каникул осоронда Башҡортостанда йәштәрҙең ваҡытлыса мәшғүллеген тәьмин итеүгә ҙур иғтибар бүленә. Быйыл белешмә менән белгестәргә бөтәһе 1,5 меңдән ашыу үҫмер мөрәжәғәт иткән. "14-18 йәшлек 12,4 мең үҫмерҙе ваҡытлыса эш менән тәьмин итергә уйлайбыҙ. Эш хаҡынан тыш, йәштәр ай һайын Кадрҙар үҙәгенән матди ярҙам сифатында 2,1 мең һумдан ашыу аҡса ала", - ти Башҡортостандың Кадрҙар үҙәге директоры Ридан Әхйәмов. Уҡыуҙан буш ваҡыттарында уҡыусылар һәм студенттар үҙҙәрен вожатый, тәрбиәсе ассистенты, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса хеҙмәткәр, комплектлаусы йәки менеджер ярҙамсыһы ролендә һынап ҡарау мөмкинлегенә эйә.

✓ ***Дарыухана препараттары кеше организмы өсөн, бер яҡтан дауа булһа ла, икенсе яҡтан ағыу икәнен онотмайыҡ, ә магазин сәйен мин хәҙер урап үтәм, сөнки улар ҙа пестицидтар, ҡоротҡостарға ҡаршы ағыу һибеп үҫтерелә.***



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Был арала дауа һәм сәй өсөн ниндәй үләндәр йыяһың?

***Айһылыу ҒӘББӘСОВА, шәфҡәт туташы:*** Тәбиғи һауыҡтырыу усулдарына һуңғы йылдарҙа айырыуса иғтибар көсәйҙе. Халыҡ синтетик препараттарҙы тәбиғи сараларға, шул иҫәптән, шифалы үләндәр һәм үлән сәйҙәренә алыштырыуҙы өҫтөн күрә. Мин ҡалала йәшәһәм дә, йыл һайын йәйге отпускымды тыуған ауылымда үткәрергә ғәҙәтләнгәнмен. Ауылға ҡайтырға елкенеп тороуымдың тағы бер сәбәбе: минең дарыу үләндәре һәм үлән сәйе йыйылмалары әҙерләү менән етди шөғөлләнә башлауым. Ә беҙҙең Йылайыр районы болондарында үләнсәсәкләрҙең ниндәйе генә юҡ! Тик был сәсәкнән-сәскәгә ҡунып, барыһын бер юлы йыйҙың да алып ҡайттың түгел - был шөғөлдөң үҙ тәртибе һәм әмәлдәре бар. Дарыу йәки тәбиғи үлән сәйе йыйылмаһы өсөн үләндәр мөмкин тиклем шифалы үҙенсәлектәрен һаҡлап ҡалырға тейеш, ә был төрлө факторҙарға бәйле: үҫемлектең өлгөрөү мәленән алып, һауа торошо һәм ай фазалары календарына тиклем шарттар иҫәпкә алынырға тейеш. Хатта ҡайһы бер үҫемлекте төлектең ҡайһы сәғәтендә йыйыу тәртибе лә мөһим. Был хаҡта мин күренекле халыҡ табибы Рим Әхмәдовтың хеҙмәттәренән, шулай уҡ башҡа махсус әҙәбиәттән уҡып төшөндөм. Мәҫәлән, һары мәтрүшкә йыйыуҙың үҙ йолаһы бар хатта: уны мотлаҡ йәйге ҡояш торошо көнөндә - 21-22 июндә - был үҫемлектә ҡояш энергияһының иң ныҡ тупланған мәлендә йыйырға кәрәк.

Сәй йыйылмалары хаҡында ҡыҫҡаса ғына шуны әйтеп киткем килә: үләндәрҙең бер-береһе менән ярашыу үҙенсәлектәрен иҫтә тотоп, төрлө маҡсаттарҙа файҙаланылыусы йыйылмалар әҙерләргә була. Мәҫәлән, иммунитетты нығытыу өсөн бөтнөк үләне, йүкә сәскәһе, кейәү үләне (чабрец), аҡсәскәне ҡушып йыйырға мөмкин. Организмды көйләү, хәл өҫтәү, ҡеүәт биреү һәм тупланыу көсөн тергеҙеү өсөн ҡурай еләге һәм аҡ акация япраҡтарына имбирь ҡушам. Кейәү үләне, артыш менән ҡарағат



япраҡтарына әфлисун ҡабығы ла өҫтәп ебәрһәң, был сәй матдәләр алмашыныуын көйләй, организмдан зарарлы ҡалдыҡтарҙы ҡыуҙыра. Балалар өсөн дә сәй әҙерләйем. Уның составына йүкә сәскәһе, аҡсәсәкә, еләк-емеш киптереп ҡушам. Был сәй баланың иммунитетын күтәрә, йоҡоһон яҡшырта. Әйткәндәй, өлкәндәр өсөн дә йоҡлар алдынан эсә торған тынысландырыусы үлән сәйе йыям: кейәү үләненә бөтнөк япраҡтары менән рауза сәскәһенең таж япраҡтары ҡан баҫымын көйләй, хәүефте баҫа, организмды йоҡоға әҙерләй. Бындай шифалы сәйҙәрҙе һәр кем үҙе һәм ғаиләһе өсөн әҙерләй ала. Тик үләндәр серенә төшөнөргә тырышырға, ulарҙы йыйыу тәртибен үтәргә, тамырҙары менән йолҡмаҫҡа, һаҡсыл була белергә генә кәрәк.

Дарыухана препараттары кеше организмы өсөн, бер яҡтан, бәлки, дауа булһа ла, икенсе яҡтан ағыу икәнен онотмайыҡ, ә магазин сәйен мин хәҙер урап үтәм, сөнки улар ҙа пестицидтар, ҡоротҡостарға ҡаршы ағыу һибеп үҫтерелә; икенсенән, сәй сеймалын һаҡлау технологияһы боҙолоу сәбәпле, ул йыш ҡына үңәҙ менән зарарлана, күгәрә, шифаһын юғалта һәм хәүефле эсемлеккә әйләнә. Шуның өсөн тыуған яғыбыҙҙың йомарт хазинаһы - аяҡ аҫтында үҫеп ултырған әҙер тәбиғи дарыуҙы бушлай файҙаланайыҡ, сәләмәт булайыҡ!

**Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ҺУҒЫШТА - ҺУҒЫШТАҒЫ КЕҮЕК...

**Үткән аҙнаның йома көнө ил халҡы Рәсәй көнөн билдәләне. Тәбиғи, был мөһим ваҡиға Киевтың нацистик режимы иғтибарынан ситтә ҡалманы, улар ҙа был датаны "үҙҙәренсә әҙерлек" менән ҡаршыланы: был көндө Рәсәй күген һөрөм һәм ут өйөрмәһенә әйләндереү өсөн ҡоторондо һәм бөтөн көстәрен һалды.**

Тап байрам көнөнә ҡарай таң һарыһынан Украина ҡораллы көстәре осора башлаған 231 дрон беҙҙең һауа оборонаһы көстәре (ПВО) тарафынан бәреп төшөрөлдө, тип хәбәр итте РФ Оборона министрлығы. Артабан быныһы менән генә үсе ҡанманы дошмандың: иртәнге сәғәт һигеҙҙән киске һигеҙгә тиклем тағы 185 дрон ебәрҙе. Улар илебеҙҙең ошо йылдарҙа күпте күреп, күпте кисергән фронт сиге буйы төбәктәре - Белгород, Брянск, Курск, Воронеж, Орел, Новгород һәм унан арыраҡ Рязань, Смоленск, Тверь, Тула, Калуга өлкәләренә һөжүм итте, хатта Коми Республикаһына ла барып етеште, ә Мәскәү һәм Мәскәү өлкәһе күгендә, баш ҡала мэры Сергей Собянин мәғлүмәттәре буйынса, 25 шартлатҡыс аппарат бәреп төшөрөлгән.

Украина ҡораллы көстәренең ҡанһыҙлығы һәм фашистик асылы өсөн бер ниндәй алыҫтыл йәки тыныс халыҡ йәшәгән торлаҡ объекттары сик түгел. Тап 12 июндең таңғы сәғәттәре Рәсәйҙең Украина сигенән меңдән ашыу саҡрымда ятҡан Татарстан территорияһындағы ике эре предприятиеһы - синтетик каучук, пластик һәм мономерҙар етештереүсе "Нижнекамскнефтехим" менән йылына 16 млн тонна ҡеүәтле "ТАНЕКО" ("Татнефть") нефть эшкәртеү заводы аяуһыҙ һөжүмгә дусар ителде. Байрам иртәһе Татарстан халҡы хәтерендә заводтарҙағы янғын менән генә түгел, ә Нижнекамскиҙағы 12 ҡатлы торлаҡ йортҡа бәреп килеп ингән дрон фажиғәһе менән дә иҫтәрендә ҡаласаҡ: дүрт кеше ауыр яраланып, дауаханаға оҙатыла, йортта йәшәүселәр ваҡытлыса пунктҡа эвакуацияланa. Дошман аппараттары хәрби техника һәм авиация өсөн кәрәкле шиналар һәм резина-техник изделиелар етештереүсе "Тольяттикаучук" ("Татнефть" предприятиеһы) заводына ла ябырыла. 12 июндә Тольятти күгендә ҡырҡ минут буйы шартлауҙар яңғырап тора. Шуға ҡарамаҫтан, завод эшен дауам итә.

Брянск өлкәһенең Белая Береза ҡасабаһы менән Вознесеновка ауылы халҡы өсөн байрам иртәһе матәм хәсрәтенә әйләнә: бында өс кеше дрондар һөжүменән һәләк була, 11 кеше йәрәхәтләнә.

Тула ҡалаһында дошман дронынан өс кеше үлгән, тағы өсәү - шуларҙың береһе 1 йәшлек кенә сабый яраланған, Брянскиҙа дрон шартлауынан баҫыуҙа эшләп йөрөгән өс механизатор һәләк булған...

Күпме дауам итер был? Рәсәйҙең төпкөл төбәктәренә һәм Мәскәүгә һөжүм итеү өсөн дошман ҡанатлы ракетаға оҡшаш реактив һәм турбовинтлы аппараттар файҙалана, уларҙың таралыу радиусы 800 саҡрымға барып етә. "Лютый" тигәндәре самолет рәүешендәге ауыр аппарат, меңдән ашыу саҡрымға тиклем осорға һәләтле. "Бобер" ҙа шул уҡ серияның. FP-1 - камикадзе дрон. Ул 1500 км араны ала һәм 120 кг шартлатҡыс ташый. Ошо ҡот осҡос камикадзелар ни өсөн тыныс халыҡ өҫтөнә яуҙырыла, бының сиге булырмы? Гонаһһыҙ сабыйҙар, тормош юлына аяҡ баҫырға хыял ҡорған үсмерҙәр һәм йәштәр, бер ниндәй ғәйепһеҙ граждандар үлеме өсөн кем яуап бирер?

"Новости" мәғлүмәт агентлығы яҙып сығыуынса, Киев Рәсәй территорияһына дрондар менән яңы һөжүм әҙерләй, һәм ул уны Европа илдәре биләмәһенән осорорға ниәтләнә. Ә шулай ҙа ҡон ҡайтарыу ҡануны үҙенекен эшләй, башҡаса мөмкин дә түгел: һуғышта - һуғыштағы кеүек булырға тейеш. Киевтың террористик актына ҡаршы Рәсәй армияһы юғары аныҡлыҡтағы ҡорал төрҙәре менән Киев, Харьков, Днепропетровск ҡалаларындағы яғыулыҡ-энергетика, транспорт объекттарына, дрондар һаҡлағыстарға ҡеүәтле ут асты. Ә фронт һыҙығында Рәсәй армияһы "Коньяк" төркөмө подразделениеларының Константиновка (Донецк республикаһы) йүнәлешендә етеҙ һәм ҡыйыу хәрәкәте һөҙөмтәһендә Киев Краматорск ауыр станоктар заводын һәм уның 3,5 меңгә яҡын эшсеһен, шулай уҡ граждандарҙы ашығыс рәүештә Украинаның көнбайыш өлкәләренә эвакуацияларға мәжбүр булды. Артабан тағы бер нисә завод үҙ сиратын көтә. Тимәк, Киев Константиновка, Дружковка һәм Краматорскиҙы ҡалдырырға йыйына, тип фаразлай мәғлүмәт сығанаҡтары. Армияны составында кеше етешмәү сәбәпле, Украина Оборона министрлығы штурмлаусы пехота частарын 30-50 процентҡа тиклем сит ил яллаұсылары менән тулыландырырға йыйына.

Яҡын Көнсығыш темаһына ҡағылышлы шуны әйтергә була: ниһайәт, АҠШ менән Иран һуғышты тамамлау һәм Ормуз боғаҙын асыу тураһында аралыҡ килешеүенә өлгәште. Уға 19 июндә Женевала ҡул ҡуйыласаҡ. Ике яҡ та үҙен еңеүсе тип иғлан итһә лә, Дональд Трамп Ирандың ихтыярын һындыра алманы, Ормуҙды асыу менән генә сикләнде, тип яҙҙы был хаҡта The Washington Post гәзите. Тәбиғи, Израилгә был оҡшамай, һәм ул тыныс килешеүгә үҙен бәйле тип иҫәпләмәй. Евросоюз иһә Яҡын Көнсығыш көрсөгө буйынса етди һөйләшеү булараҡ, килешеүҙе хуплаһа ла, уның оҙайлы тотороҡлоҡ килтерерәнә шик белдерә.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓ Өфөләге БПЛА һөжүменән зыян күргән Ғафури урамындағы 54-се йортта ремонт эштәрен 31 октябргә тиклем тамамлау планлаштырылған. Был хаҡта республика Хөкүмәтенең аҙналыҡ кәңәшмәһендә баш ҡала хакимиәте башлығы вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Шәрипов хәбәр итте. Уның һүҙҙәренсә, йортто капиталь ремонтлау буйынса юл картаһы Өфө хакимиәте тарафынан әҙерләнгән һәм раҫланған. Аҡса ҡала бюджетынан бүленә.

✓ Өфөлә һыу инеү миҙгеле асылды. Быйыл ҡала халҡы өсөн туғыҙ пляж эшләйәсәк. Дим районында - Матур күлдәге "Матур аҡлан", Калинин районында - Ҡариҙел йылғаһындағы "Ҡомло" һәм Йылы күлендәге "Гольфстрим", Киров районында - Ағиҙел йылғаһындағы "Ҡояшлы", Ленин районында - Ағиҙел йылғаһындағы "Водник" һәм "Аҡ яр", Октябрьский районында Ҡариҙел йылғаһындағы "Ҡояшлы яр" һәм "Һупайлы Соснаһы" һәм шулай уҡ Ҡашҡаҙан күлендә "Ҡашҡаҙан" рәсмиләштерелгән һәм тейешенсә йыһаҙландырылған пляждар булып тора.

✓ Башҡортостан Республикаһының Милли музейында "Аксаковтар ғаиләһе - Ватанға хеҙмәт итеү" күргәҙмәһе асылды. Экспозиция - яҙыусы Сергей Тимофеевич Аксаковтың тыуыуына 235 йылға арнала һәм Рәсәй халыҡтарының берҙәмлеге һәм төбәктә иғлан ителгән Ҙур һәм татыу ғаилә йылдарындағы сараларҙың мөһим өлөшө. Күргәҙмәлә Милли музей һәм С.Т. Аксаков Мемориаль-йорт музейы фондтарында һаҡланған XVIII - XIX быуаттарҙа баҫылған төп һәм һирәк баҫмаларҙы күрергә мөмкин.

✓ "Башнефть" заправкаларында йәнә хаҡ артҡан. Бензиндың популяр маркалары 10 тингә ҡиммәтләнгән. Хәҙер АИ-92 - 61,95 һум, АИ-92 ATUM - 63,30 һум, АИ-95 - 66,10 һум, АИ-95 ATUM 67,35 һум тора. АИ-100 бензинына хаҡ 50 тингә артҡан, уның бер литры өсөн 89,45 һум түләргә кәрәк. Дизель яғыулығы 30 тингә ҡиммәтерәк, 76,70 һум. "Башнефть" компанияһы 2026 йылдың башынан алып - 14-се, ә июндә икенсе тапҡыр хаҡтарҙы күтәрҙе. "Лукойл" заправкаларында АИ-92 - 64,35 һум (+11 тин), АИ-95 - 69,16 һум (+8 тин), АИ-100 - 96,27 һум (+33 тин), дизель яғыулығы 77,89 һум (+71 тин) тора, тип хәбәр итә russiabase.ru сайты.

✓ "Победа" авиакомпанияһы 4 июлдән Өфөнән Истанбулға рейстар аса. Баш ҡала аэропорты мәғлүмәттәре буйынса, улар дүшәмбе һәм шәмбе көндәрендә Boeing 737 самолеттарында башҡарыла. Юлда булыу ваҡыты - 4 сәғәт. Әлеге ваҡытта Өфөнән Истанбулға Utair һәм Red Wings авиакомпаниялары самолеттарында осорға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ПЕДАГОГ ҺҮҘЕ*



Константин УШИНСКИЙ

# БАЛА ТӘРБИӘҺЕ

### Тәрбиә нигеҙе ғаиләлә

**Бәләкәй сағында үҙ әсәһенән төплө белем һәм һәйбәт тәрбиә алған рус педагогы Константин Ушинский шундай һығымтаға килә: бала башланғыс төп нигеҙҙе, аң һәм әхлаҡи тәрбиәне өйҙә, педагогик белемгә эйә һәм әҙерлекле булған Әсәнән ала. Балаларҙы сит илдәргә ебәреп уҡытыу һәм тәрбиәләү өҫтөнлөклө, маҡтаулы һаналғанлыҡтан, заманында бөйөк педагог, йәғни әсеп, һәр баланың үҙ мөхитендә тәрбиәләнергә һәм белем алырға тейешлеге тураһында яҙа. Әлбиттә, ул үҙ урыҫ халҡының тәрбиәһенә туҡтала. Әммә уның яҙғандары һәр милләткә лә ҡағыла. Уның "урыҫ ҡатындары", "урыҫ ғаиләһе", "урыҫ мөхите" тип яҙғандарын һәр милләт вәкиле үҙ милләтенә ҡайтарып аңларға тейеш. Уҡыусыларыбыҙға Константин Ушинскийҙың тәрбиә тураһындағы мәҡәләләрен тәҡдим итәбеҙ.**

Беҙҙә башланғыс белемде һәм тәрбиә нигеҙҙәрен өйҙә башлау ғәҙәткә ингән, һәм Алланан был йүнәлештең таралыуын, камиллашыуын ғына һорайһы ҡала.

Сит илдәрҙә бәләкәй балалар өсөн асылған мәктәптәрҙе күргәндән һуң, шундай һығымтаға килдем: бала, һис юғы 8-10 йәшкә тиклем, тәрбиәне һәм белемде өйҙә алырға тейеш, мәктәптәрҙә уҡытҡан сүрәттә лә, мәктәп мөхите өйҙәгенекенән айырылмаҫҡа тейеш. Шул саҡта ғына мәктәптә уҡытыу һөҙөмтәле буласаҡ.

Байтаҡ ҡына илдәрҙә булғандан һуңғы һығымталарымдан сығып, шуны әйтә алам: сит илдә балаларҙы тәрбиәләү һәм белем биреү эше яҡшы ойошторолған. Әммә тәрбиә эшендә көнө буйы ауыр хеҙмәт менән мәшғүл булған әсәнең генә түгел, хатта мөмкинлеге булған әсәләрҙең ҡатнашмауын дөрөҫ түгел тип һанайым. Шуныһы ғәжәп: уларҙа хатта ҡатын-ҡыҙ тәбиғәтенә хас булған педагогик йүнәлеш тә үҫешмәгән.

Был хәлдең сәбәптәренә төпсөнөп тормайынса, шуны әйтке килә: урыҫ әсәләре үҙ балаһына тәү белем биреү һәм һәләтен үҫтереү менән шөғөлләнеү кинәнесен, үтә мохтажлыҡ булмаһа, башҡа бер кемгә лә бирмәһен ине. Ҡатын-ҡыҙҙа бала тәрбиәләү һәм белем биреү һәләте тыумыштан килә.

Мин бының дөрөҫлөгөнә инанғанмын. Әгәр байтаҡ ҡына әсәләрҙең үҙ балалары менән шөғөлләнергә теләге ҙур булып та, был эште мәктәп йәки икенсе кеше ҡарамағына ҡалдыра икән, был инде уларҙың балаға тәү белем биреүгә әҙерлекһеҙ икәнлеген аңлата.

(Дауамы бар).

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# СӘЙӘХӘТСЕ ҒАЛИМ ПАЛЛАС...

## Салауат батырҙың тыуған ерендә булған



**16 июнь - милли батырыбыҙ Салауат Юлаевтың тыуған көнө, быйыл уның тыуыуына 272 йыл тулды. Күпме генә йылдар уҙмаһын, уның яҡты, изге образы башҡорт хәтеренән юйылмаясаҡ. Емельян Пугачев башлаған ихтилалдан өс кенә йыл алдараҡ, йәғни 1770 йылда, батырыбыҙ тыуған-үҫкән ерҙәр аша Санкт-Петербург Фәндәр академияһы академигы Петр-Симон Паллас экспедицияһы үтеп китә. Күренекле ғалим "Путешествие по разным местам Российского государства" тигән китабында ошо төйәк хаҡында бик ентекле мәғлүмәттәр ҡалдырған. Ошо әҫәрҙән алынған өҙөктө уҡыусыларыбыҙ иғтибарына тәҡдим итәбеҙ.**

Егертауҙы (нөсхәлә русса Джигер-Тау) уҙып, шыршы ағастары менән ҡапланған шырлыҡтар аша үтеп киткәс, беҙ ҙур ғына үҙәнгә килеп сыҡтыҡ. Был үҙәндә һирәк кенә үҫкән ҡайын сауҡалығына тап булдыҡ, бынан егерме саҡрым тирәһе арыраҡ Эҫемгә (Сим) ҡойған Ерал (Ераль) йылғаһы буйында һигеҙ йыл элегерәк рус ауылына нигеҙ һалынған. Ерал ауылы Твердышевтың тимер заводтарына ҡарай. Тиҙҙән башҡорттарҙың Шайтан-көҙәй олоҫоноң Юлай (Гулей) һәм Шағанай (Шиганей) ауылдарынан алмашҡа яңы аттар килтерергә тейеш инеләр, шуға күрә мин, ауыр йөк арбаларын ҡалдырып, Ерал ауылынан Ҡатау (Катавский) тимер заводына йүнәлдем. Уға тиклем йәйге юлдан ҡырҡ бер, ҡышын утыҙ саҡрым тирәһе юл үтергә кәрәк.

Кире ҡайтҡанда мин икенсе юлды һайланым, ике тапҡыр Эҫем йылғаһын, унан һуң Ямаҙы (Ямазе) йылғасығын кисеп сыҡҡас, алыҫтараҡ Ямаҙы Ҡарағай түбәһе күренде, унан шишмәләр ағып сыға. Төштән һуң сәғәт биштә Миндеш ауылын үтеп, эңерҙә ауыр йөктәремде ҡалдырып киткән Ералға килеп еттек. Икенсе көндә иртә менән уларҙы тура юлдан Шағанай ауылы аша егерме ике саҡрымдағы Ҡаратаулы ауылы янындағы Йөрүҙән (Юрьюзен) кисеүенә, артабан Нәсибаш (Ниссебаш) тигән мишәр ауылына ебәрҙем. Үҙем көньяҡ-көнсығыштараҡ урынлашҡан мәмерйәләрҙе ҡарарға киттем, бында, Ералдың тигеҙ ерҙәрен биш саҡрымлап уҙғас, тағы ла тау һырттарында үҫкән ҡайын сауҡалыҡтары башлана. Тауҙар араһынан Күлмәк тигән инеш ағып сыға, уның янында алты ғына өйҙән торған бәләкәй башҡорт ауылы урынлашҡан. Йылғасыҡҡа плотина эшләнгән, унда ярма тартыу тирмәне ҡуйылған. Бындай тирмәнде беренсе тапҡыр күрҙем, һуңынан улар йышыраҡ осраны. Был ғәҙәти булмаған ҡоролманы башҡорттар үҙҙәре уйлап тапҡан, шуға күрә уның хаҡында ентеклөберәк яҙып китеү фарыз.

Ауыр булмаһын өсөн улар иң бәләкәй йылғасыҡтарҙы файҙалана, уларҙы сыбыҡтан үрелгән ситән менән кәртәләп, ер һалалар, йә иһә сыбыҡ үрелмәләренән (фашинниктан) бәләкәй генә ысын плотина төҙөйҙәр. Плотинала бағаналар (свайҙар) өҫтөнә бәләкәй генә ыҙма һалына, уның уртаһында өҫтәл урынына бура эшләнә. Уның өҫтөнә тирмән ташы ҡуйыла, әммә ул таштан яһалмаған: ныҡлы ағас тамырынан, йә ағастан эшләнгән тоташ тәгәрмәстең уртаһынан ҡырыйына тиклем күп итеп бәләкәй генә тимер киҫкестәр ҡаҙап ҡуйылған. Аҫтағы тирмән түңәрәге таҡтала хәрәкәтһеҙ ята, ә өҫтәгеһе алынып тора. Ул аҫҡы түңәрәктең үҙәге аша сығарылып ҡуйылған тирмән ҡуласаһы күсәре ярҙамында хәрәкәткә

*ТАРИХИ ЯҘМАЛАР*

# КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘ УҪАЛЛЫҠ ЮҠ...



**"Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ..." тигән һүҙҙәр Салауат яуы ваҡытында 1774 йылдың 10 сентябрендә Салауат Юлаев менән Юлай Аҙналиндың Ҡатау заводы эшселәренә яҙған мөрәжәғәтендә әйтелә. Был документты тәүге тапҡыр тарихсы Ә.Н. Усманов 1962 йылда "Ағиҙел" журналының 8-се һанында (86-93-сө биттәр) баҫтырып сығара. Рауил Бикбаевтың "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ..." тигән шиғыры ла бар.**

Хәрби писарь Ғәбдрәшит уғлы ҡул ҡуйған тарихи документ "Салауат менән Юлайҙың Ҡатау заводы эшселәренә мөрәжәғәте" тип атала. Уның тексы түбәндәгесә: "Беҙ главный атаман Юлай Аҙналы улынан һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улынан һүҙ шулдыр: Һеҙ, Ҡатау заводында командир булып тороусы приказчиктарға һәм ҡарттарға! Әгәр һеҙҙең кешегеҙ беҙгә тотолһа, беҙ уларҙы үлтермәйенсә һәм зарар килтермәйенсә һеҙгә ҡайтарабыҙ. Әгәр беҙҙең кешебеҙ һеҙгә тотолһа, итәһегеҙ уны тотҡон һәм бәғзеләрен үлтерәһегеҙ, имеш. Беҙ, әгәр беҙҙең күңелебеҙҙә уҫаллыҡ булаһы булһа, Алла теләһә, һеҙҙән артығыраҡ тотоп һәм һеҙҙән артығыраҡ үлтерер инек. Беҙ теләмәйбеҙ, күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡлыҡтан. Инде күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ. Әгәр татыулыҡты теләй торған булһағыҙ, ебәрегеҙ Мусабай Бикйән улын (ул 14 июндә завод етәкселеге менән һөйләшер өсөн Юлай менән Салауат тарафынан ебәрелә һәм унда ҡулға алына - **Ә.Ғ.-Ү.**), аралыҡта йөрөп татыулаштырыу өсөн. Һеҙҙең беҙгә тотолған ике урыҫтың береһен ҡайтарҙыҡ, яҙыу менән һәм Мусабай ҡайтып килгәндән кизин (аҙаҡ, һуң - М.Х. Иҙелбаев аңлатмаһы), бында беҙҙең ҡулыбыҙҙа ҡалған берәүһен дә ҡайтарырбыҙ.

Беҙ бер-беребеҙ менән бәхәсләшеп, бер вә беребеҙҙе бөлдөрөшөп торорға мөмкин түгелдер: көллөбөҙ ҙә бадишаһыбыҙ император Петр Федорович хәҙрәттәренең ҡолобоҙ һәм беҙгә даим изге хәбәрҙәр килә, указдар

✔ ***Шағир был әҫәрендә Салауатты "свирепый" тип атай, уны мәрхәмәтһеҙлектә ғәйепләй. Ҡыҙыҡ, бер сикәһенә һуҡҡандан һуң икенсе сикәһен ҡуйған кеше образында күрергә теләнеме икән башҡортто Александр Пушкин?***



килтерелә: күсәрҙең осона тимер ырғаҡ беркетелгән, ул өҫкө таштың уртаһындағы уйымға инеп тора. Күсәр, ғәҙәттә, ағастан яһала: йыуан тамырҙың аҫҡы өлөшө суҡмар кеүек итеп киҫеп алына, уға, тәгәрмәс күсәренең тырнаҡтары кеүек, улаҡлы итеп эшләнгән ҡанатсыҡтар беркетелә, был һыу ҡуласаһы була. Күсәрҙең аҫтына тимер кендек ҡағып индерелгән, ул аҫҡы яҡтан күсәрҙе свай тотҡаһында тура итеп тотоп тора һәм әйләнеүҙе мөмкинлеген бирә. Плотина уйымы аша ҡуйылған улаҡтан аҡҡан һыу күсәр тырнаҡтарының улаҡтарына төшә һәм гоизонталь ятҡан ҡуласаны, унын күсәрен һәм өҫтәге тирмән түңәрәген әйләндерә. Тырнаҡтар араһына оҙонса һайғау тығып, тирмәнде туҡтатып була. Бәғзе урындарҙа тирмәнде улаҡты ситкә күсереп тә туҡтаталар.

Ярма йә иһә эре он тарттыра торған ашлыҡ, башҡа бер ҡәҙимге тирмәндәрҙәге кеүек, таҡта кузовҡа ҡойола, унын аҫҡы яғындағы бәләкәй генә улаҡ өҫкө тирмән түңәрәгенең тап уртаһындағы тишеккә тура килтереп эшләнә. Ашлыҡ һалынған ҡап тирмәндең арҡыры һайғауына һелкенеп торорлоҡ итеп элеп ҡуйыла, ҡапҡа бер осо менән тирмән түңәрәгенә тейеп торған рычаг беркетелгән. Тирмән ташы әйләнгән саҡта әлеге ҡап та һелкенеп тора, унан аҫтағы кузовҡа ашлыҡ аҙлап ҡына ҡойола бара. Әгәр башҡорт ашлыҡтың ҡойолоуын, йә иһә тирмәнде бер аҙға туҡтатып торорға теләһә, әлеге рычагты ситкә алып тора. Мин башҡа бер оҫта ла бынан ябайыраҡ һыу тирмәнен уйлап таба алырына шикләнәм.

***Мин бынан Күлмәк йылғаһы буйлап, уға ҡушылған Һарыҡондоҙ (Саракундус) инеше аша түбәнгә табан ыңғайланым; һуңынан ошо инешкә ҡушылған Көҫкәнде (Кускинде) йылғасығы аша сыҡтым, ул Йөрүҙәнгә ҡоя. Бынан ошо йылғасыҡтың һул яғында урынлашҡан, таралышып ятҡан бер нисә өйҙән торған Шайтан ауылынан (Шайтан-аул) бер нисә оҙатып йөрөтөүсе алып, Көҫкәнде аша юлһыҙ-ниһеҙ ерҙән туп-тура көнсығышҡа табан, һирәк кенә ҡайындар үҫкән, ике тау һыртынан хасил булған Һарыҡондоҙ тауы (Саракундус-Тау) буйлап кирегә киттем. Ошо тау һырттары араһындағы үҙәндә күп булмаған өйҙәрҙән торған Юлай (Гулей) ауылы урынлашҡан, унда Шайтан-көҙәй (Шайтан-кудей) нәҫеле башлығы (начальнигы) йәшәй.***

Ауыл эргәһенән бер нисә инештән хасил булған, ҙур булмаған йылғасыҡ, төньяҡҡа табан боролоп ағып, ошо уҡ үҙәндә бер саҡрымда ятҡан һаҙлыҡҡа кереп юғала. Әммә, шуға ҡарамаҫтан, унын ағымы яҡшы беленеп тора, бәлки ул ер аҫтынан Йөрүҙән менән тоташҡандыр, сөнки йәй көндәрендә лә бер ҡасан да ҡоромай.

Икенсе тау һыртын уҙыуға өсөнсөһө башлана, унын түбәһе бейек һәм ныҡ ташлы, унын артында Йөрүҙән көньяҡ-көнбайыштан һәм көнбайыштан төньяҡҡа табан аға башлай. Был тауҙа, шулай уҡ Йөрүҙәндең икенсе яғында ятҡан барса һырттарҙа, бик күп ҡарағай үҫә, шуға күрә был яҡта йәшәүсе башҡорттар уны Ҡарағай тип исемләй (нөсхәлә: "сосну и вообще сосновый лес называют башкирцы карагай"). Шул уҡ тауҙа бәләкәй генә Иҙрис (Идресс) исемле ауыл урынлашҡан, ә тауҙа мәмерйә бар, мин уны барып ҡарарға ниәт иттем...

Шайтан-ауылға килгән юл менән кире ҡайттым. Бында йәшәгән башҡорттар тирә-яҡтағы баҫыуҙарҙы яҡшы файҙалана, күп итеп ер һөрөп, 40 боттан 50 ботҡа тиклем иген сәсәләр. Былтырғы йәй ҡоро килгәнлектән, ашлыҡ аҙ алына, шуға күрә быйыл, сәсеү орлоғо етмәгәс, баҫыуҙарҙың яртыһы ғына сәселгән. Улар ерҙәрен татар һабанына 4, ҡайһы саҡта 6 ат егеп һөрә. Яңы ергә ике йыл арпа, ике йыл һоло, ике йыл ужым арышы һәм тағы ла бер, йә иһә ике йыл яровой иген сәсәләр, шунан һуң яңы урында сиҙәм һөрөлә. Бойҙай һәм ҡарабойҙай сәсмәйҙәр...

Йөрүҙәндең икенсе яғында, башҡорт ауылынан өҫтәрәк, тағы ла бер ҙур булмаған ҡыҙыҡлы урын бар. Йылға буйындағы тау һыртынан Ҡорғаҙак (Кургузак) шишмәһе ағып сыға һәм, 60 сажинлап үткәс, шәп ағымын бейек ярҙан Йөрүҙәнгә ҡоя. Әммә ошо ҡыҫҡа ғына арауыҡта дүрт тирмән ҡуйылған, улар бында йәшәгән Йәнгилде (Янгилле) һәм Күскилде (Кюскилде) исемле башҡорттарҙыҡы...

Башҡорттар, ҙур һәм бәләкәй тауҙарҙы, шишмәләрҙе һәм бәләкәй генә ҡылымыҡтарҙы, үҙәндәрҙе, сауҡалыҡтарҙы һәм барса башҡа тәбиғи ыҙандарҙы айырып, исемләп атағанлыҡтан, уларҙың был урындарҙы борондан бирле төйәк итеүенә дәлил итеп ҡарап була. Унан башҡа, тик бер урында ғына йәшәмәүҙәре һәм һунар итеүгә әүәҫ булыуҙары сәбәпле, улар даланы юлһыҙ-ниһеҙ гиҙеп йөрөй, бының өсөн унын билдәле бер урындарына атама бирә. Әгәр башҡорттар ысынлап та Урал тауҙарында йәшәгән боронғо кешеләрҙең тоҡомдары булып, яңы тикшеренеүселәр әйтеүенсә, венгрҙарға туғандаш халыҡ икән, татарҙар (төркиҙәр. - **Тәрж. иҫк.**) менән аралашыу һөҙөмтәһендә уларҙың боронғо телдәре бөтөнләйгә юғалыуға дусар булған, төҫ-ҡиәфәттәре һәс сәс төҫтәре татарҙарҙыҡына оҡшай башлаған, әммә был уларҙың йәшәү рәүешен һәм йәшәү урынын үҙгәртә алмаған.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**

арҡыры: улы Павел Петровичҡа ҡушҡандыр, тип, һеҙ ҙә уларҙың сәләмәтлеген теләгеҙ, тип. Изгелек теләүсе дуҫығыҙ баш атаман Юлай Аҙналы улы ҡулым ҡуйҙым һәм бригадирлыҡ эшен башҡарыусы баш полковник Салауат Юлай улы ҡулым ҡуйҙым.

1774-се йыл рәжәптең 15 көнөндә Войсковой писарь Ғәбдрәшит улы ҡулым ҡуйҙым".

Был хат уларҙың авторҙары тарафынан ике яҡты, йәғни баш күтәреүселәр менән Ҡатау заводы етәкселеге араһындағы мөнәсәбәтте көйләү, килешеү маҡсатында яҙыла. Тарихтан билдәле булыуынса, көҙөйҙәрҙең һәм ҡыуаҡандарҙың аҫаба ерендә рөхсәтһеҙ, баҫып алыу юлы менән һалынған был завод ҡоролмалары һуңынан баш күтәреүселәр тарафынан яндырыла. Был ҡаршылыҡ Салауат яуы тарихының әллә ни ҙур әһәмиәтле, һынылышлы ваҡиғаһын тәшкил итмәһә лә, Юлай Аҙналин менән Салауат Юлаевтың завод етәкселегенә яҙған өндәмәһе тексы, ундағы айырым һүҙбәйләнештәр һәм фразалар күп кенә нәмәләр хаҡында тәрән уйланырға мөмкинлек бирә. Бер яҡтан уйлағанда, улар был хаты менән "Пугачев бунты тарихы" авторы Александр Пушкинға ла яуап бирә. Шағир был әҫәрендә Салауатты "свирепый" тип атай, йәғни уны ҡанһыҙлыҡта, мәрхәмәтһеҙлектә ғәйепләй. Ҡыҙыҡ, бер сикәһенә һуҡҡандан һуң икенсе сикәһен ҡуйған кеше образында күрергә теләнеме икән башҡортто Александр Пушкин? Әгәр шулай икән, шағир башҡорт тарихы хаҡында урыҫ феодалдары мәнфәғәте күҙлегенән генә сығып фекер йөрөтә. Ваҡытында дөрөҫ ҡулланмаған бер генә һүҙ өсөн быуаттар үткәндән һуң да шағирҙы хәҡиҡәт алдындағы намыҫ яуаплылығы хөкөмөнә баҫтырырға була, тигәнде аңлата булыр был хәл. Шағир һәр һүҙе өсөн тарих алдында яуаплы.

Икенсе яҡтан ҡарағанда, башҡорттоң ни өсөн шулай үҙ дошманына ҡарата аяуһыҙ көрәшеүенең дә тарихи сәбәптәре асыҡлана Юлай менән Салауаттың өндәмә хатында. "Һеҙ беҙгә ҡарата ниндәй мөнәсәбәттә булһағыҙ, беҙ ҙә һеҙгә шундай уҡ юл менән яуап бирәбеҙ, һеҙ беҙгә ҡарата аяуһыҙ булһағыҙ, беҙ ҙә һеҙгә ҡарата шулай уҡ аяуһыҙ", тигәнде аңлата булыр был принцип. Был осраҡта "Һорауына күрә яуабы" тип тә әйтәләр.

Американың билдәле киноактеры, музыканты һәм продюсеры Брюс Уиллистың был йәһәттән башҡорт милләтенең тарихи характерын да асып бирергә булышлыҡ итерлек, шулай уҡ Пушкиндың Салауат хаҡындағы һүҙҙәренә яуап булырлыҡ бик тәрән мәғәнәле һүҙҙәре бар. "Аяуһыҙлыҡ, ҡанһыҙлыҡ - изге кешеләрҙең характер һыҙаты, ул һыҙат башҡалар һинең изгелегеңә аяҡ һөртә, төкөрөп ҡарай башлағанда барлыҡҡа килә", ти актер. Был һүҙҙәрҙе ул ниндәй сәбәптән һәм ниндәй маҡсатта әйткәндер, әммә Салауаттың "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ" тигән һүҙҙәрен киң мәғәнәлә һәм дөрөҫ итеп аңларға мөмкинлек биреүе көн кеүек асыҡ.

Салауат Юлаевтың ҡулға алынғандан һуң Шайтан-Көҙәй улысына иректәге туғандарына хакимдар алдында ғаилә мәнфәғәттәрен ҡайғыртыу тураһында һорап яҙған хаты ла айырым иғтибарға лайыҡ. Унда ла тәүге документтағы кеүек "Ни өсөн күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ?" тигән һорауға яуаптар бар: "Мәғлүм булһын: бөгөнгө көндә үҙ йорттарында йәшәүсе старшиналарҙан беҙҙең эштәр тураһында һорашһалар, беҙгә юҡ-бар яла яҡмаһындар, дөрөҫөн күрһәтһендәр: Пугачевтан беҙгә генә түгел, бөтә дүрт юлға ла приказ булды бит, беҙ заводтарҙы яндырыуҙы һәм көрәште шул приказ арҡаһында ҡылдыҡ.

(Дауамы 8-се биттә).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Йорт производствоһы

Ижау башҡа халыҡтарҙағы кеүек үк биҙәлмәһә лә, үҙенең формаһы менән бик нәфис һәм матур булған. Өҫкә ҡаратып бөгөлгән тотҡаһына ниндәйҙер форма бирергә, биҙәргә тырышҡандар (**һүрәттәр**). Ижау башлыса ҡайын ороһонан йәки ҡайын тамырынан яһалған.



Ит, бутҡа һәм башҡа аҙыҡты һоҫоп алыу өсөн сүмес ҡулланылған (**һүрәт, *г, д***). Ҡалаҡты баҙарҙан һатып алғандар, ҡайһы бер урындарҙа унын менән бөтөнләй ҡулланмағандар. Башҡорттарҙың үҙҙәре яһаған ҡалаҡтары бик бәләкәй булған (**һүрәт, *в***). Һалма һөҙөп алыу өсөн һалма һалғыс тип аталған тишекле сүмес, йәиһә муйыл йәки балан ботаҡтарынан үрелгән ҡулланма ҡулланғандар (**һүрәт, *а, б***). Һуңғыһын ҡайһы бер ерҙәрҙә һурпа тип атайҙар.



*а б в г д*

Ағастан һауыт-һаба яһау менән һәр башҡорт шөғөлләнгән, әммә махсус рәүештә һатыу өсөн һауыттар яһаусы оҫталар ҙа булған. Соҡоп яһалған ағас һауыттарҙың тағы бер төрө һелкеүес тип атала, икмәк бешергәндә ондо ошо кәритәгә оҡшаған һауытҡа һалып торғандар (**һүрәт**).



Ағастан соҡоп яһалған һәм төбө айырым ҡуйылған һауыттар төрлө ҙурлыҡта булған. Йүкә, һирәгерәк ҡайын олононан соҡолған бейек һауыт силәк тип аталған. Унын бейеклеге 20-30 см-ҙан 1 м-ға, ә диаметры 10-40 см тиклем булған. Өҫкө өлөшөндә яһалған тишеккә бау үткәреп, тотҡа урынына ҡулланғандар.

Бал һаҡлау өсөн ҡулланылған уртаса ҙурлыҡтағы силәк батман тип атала. Унын мотлаҡ ҡапҡасы ла була. Элек батман иҫәпләү сараһы ла булып торған, XX быуат башында был атама менән бер бот бал һыймалы һауытты атағандар. Ҡымыҙ һәм айран әҙерләү, иген, он һаҡлау өсөн дә силәк ҡулланылған. Яҡынса 1 метр бейеклегендәге һәм бик бәләкәй диаметрҙағы (15-18 см) силәк май төшөрөү өсөн ҡулланылған һәм гөбө тип атала. Бейә һауыу өсөн ағастан соҡоп яһалған күнәктең артында ҡолағы, ә алдында һөт ҡойоу өсөн уңайлы уйымы була. Тәпән тип аталған ағас һауыттар ҙа силәк кеүек үк яһала. Улар һыу һауыты итеп тә, табынға ҡымыҙ, әсе бал биреү өсөн дә ҡулланылған. Әсе бал һалыу өсөн ҡапҡаслы һауыт - көрәгә булған, ул семәрләп биҙәлгән, бер-ике биҙрә һыймалы булған (**һүрәт**). Ағас көрәгәләр бал әсетеү һәм буҙа ҡойоу өсөн дә ҡулланылған.



*а б*

(Дауамы бар).

✓ *Һинең баҡый донъяла ла башҡортлоғоң - баш ирлегеңде һаҡлап, үҙ асылына тоғро бер йыһангир йән булыуыңа ысын күңелдән ышанабыҙ. Үҙ илеңдән, сал Уралыңдан сәләмдәр көтөп зарыҡҡанһыңдыр инде.*



ТАРИХИ ЯҘМАЛАР

# КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘ УҪАЛЛЫҠ ЮҠ...

**(Башы 6-7-се биттәрҙә).**



Ә бер рус менән бер сыуаш кешеһе аҫылһа, уларҙы атаман Белобородовтан (шундай) указ бар, тип, Ибрәш Галин тотоп алып килеп аҫты. Был ысынлап та дөрөҫ. Әйберҙәрен һәм бурыл атын алып, шуның менән йөрөнө, үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит.

Беҙҙән шикләнмәгеҙ. Беҙ хәҙерге көндә өйҙәрендә йәшәгән халыҡҡа бер ниндәй ҙә ғәйеп ташламаныҡ, ә уларҙың именлеген генә ҡайғырттыҡ. Шуға күрә улар ҙа беҙҙе изге доғаларынан ташламаһын ине...

Ҡатындарыбыҙ һәм балаларыбыҙ хаҡында Ырымбурға хәбәр бирегеҙ: беҙҙе ҡәрҙәштәребеҙ ҡотортманы, шуға уларҙы азат итһендәр, тип яҙығыҙ. Әгәр быны губерна канцелярияһы эшләй алмай икән, Сенатҡа ебәрһен: ғәзими хәҙрәттәренең ҡолдары уға бойһоноусылар ҡулы аҫтында хеҙмәтсе булмаһын. Балаларҙың йәшен күрһәтегеҙ.

Ғүмерҙәре юҡ ителеүселәрҙең (йәғни, аҫып йә язалап үлтерелеүселәрҙең) ғаиләләрен тартып алырға тигән указ ысынлап юҡ. Беҙ, Хоҙай ҡушһа, язаланмабыҙ тигән өмөттә торабыҙ, сөнки хәҙер үлем язаһы тыйылған. Әгәр һеҙ ошолар хаҡында ҡайғыртмаһағыҙ - кеше түгелһегеҙ: кешеләр аттар тураһында ла юллайҙар һәм хәстәрлек күрәләр.

Беҙҙең турала ла хәбәр бирегеҙ, Салауаттың ҡатынын һәм бер улын комендант ҡарауылы һаҡлай, тип яҙығыҙ. Резолюцияға тиклем уларҙы (комендант) һәләк итеп ҡуймаһын, тип ҡурҡабыҙ. Бер улымды секретарҙа фатирҙа тороусы генерал алған. Бүтән ҡатындар һәм балалар ҙур (түрәләр) тарафынан таратып алынған, һәм улар көн һайын бергә ашайҙар, йөрөйҙәр, ҡатындар һәм балалар алдында ҡыланалар. Күрһәтмәләрҙе дөрөҫ ҡарамаҫтар, тип уйлайбыҙ. Чукаловтан күҙ йәштәре менән һорағыҙ - беҙҙе һәм беҙҙең эште губерна канцелярияһы ҡарамағына алһындар, мең һум кәрәк булһа ла - бурысҡа булһа ла алығыҙ, өҫтәүенә, мишәрҙән аҡсалы һандыҡ алынған, тип ишеттем, (шунын) табылыуы ихтимал.

Был хатта яҙылғандарҙы (үтәргә) тырышығыҙ, һәм беҙҙән һуң ҡалып йәшәгәндә йорттарығыҙҙа тороғоҙ һәм мөлкәт йыйнағыҙ.

Тәржемәсе Андрей Васильев тәржемә итте".

Салауат батырыбыҙ шәхесен кәмһетергә, уны ҡанһыҙлыҡта, мәрхәмәтһеҙлектә ғәйепләргә теләүселәрҙе инҡар итеү өсөн был документтар кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәр булырлыҡ. Салауаттың шул уҡ иректәге туғандарына яҙған хатындағы ошо юлдарға кире әйләнеп ҡайтайыҡ: "...Ә бер рус менән бер сыуаш кешеһе аҫылһа, уларҙы атаман Белобородовтан (шундай) указ бар, тип, Ибрәш Галин тотоп алып килеп аҫты. Был ысынлап та дөрөҫ. Әйберҙәрен һәм бурыл атын алып, шуның менән йөрөнө, үҙегеҙ ҙә күрҙегеҙ бит..."

Был юлдарҙа беҙ Салауатты, ниндәй халыҡ вәкиле булыуына ҡарамайынса, һәр кешенең ғүмере өсөн яуаплылыҡ тойған гуманист итеп тә беләбеҙ. Быны беҙ батырҙың аҡланыуы итеп ҡабул итә алмайбыҙ, сөнки былар "Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ" тигән кешенең йөрәк һүҙе. Икенсенән, бында тағы ла ниндәйҙер Ибрәш Галин тигән исем һәм бурыл ат телгә алына. Тарихсылар өсөн был тағы бер бурыс: кем булған һуң ул Ибрәш Галин? Әгәр ҙә ул Салауаттың рухташы, дуҫы булһа, хатта телгә алыныр инеме икән? Яҙмаларҙан шул да асыҡлана төшә: Пугачев яуы осоронда ҡайһы урында кемдең ғүмере ҡыйылһа, ниндәй йорт яндырылһа, былар барыһы ла яу башлығы булған Салауатҡа һәм уның көрәштәштәренә япһарыла. Былар "Бүренең ауыҙы ашаһа ла ҡан, ашамаһа ла ҡан" тигән хәҡиҡәтте тағы ла бер тапҡыр раҫлай. Күңелендә уҫаллығы булмаған кешенең ғәмәл-ҡылыҡтарына һис тә оҡшамаған был.

Беҙ бығаса 1773-1775 йылдарҙағы тарихта Пугачев етәкселегендәге крәҫтиәндәр һуғышы тип аталған күтәрелеште баш күтәреүселәр менән батша ғәскәрҙәре араһындағы ҡапма-ҡаршылыҡ тип өйрәндек һәм был ваҡиғаларҙың тышҡы яғына ғына күберәк иғтибар иттек, буғай. Һәр хәлдә, тарихсылар крәҫтиәндәр һуғышын тап ошо аспектта ғына өйрәнде. Ә бит баш күтәреүселәр сафындағы эске конфликт тағы ла көслөрәк булған. Тимәк, 1773-1775 йылдарҙағы күтәрелештә тик бер генә һуғыш булмаған, ҡапма-ҡаршылыҡтарҙың ил эсендә тағы ла бер нисәүһе булған. Быны иҫбатламаһы: Пугачев, Салауат һәм уларҙың күп кенә көрәштәштәре эске дошмандар тарафынан батша ғәскәрҙәренә тотоп бирелгән. Тарихсылар был ваҡиғаларға берәй ваҡыт асыҡлыҡ индерер, әлбиттә. Тарих фәне хәҡиҡәткә тоғро булған осраҡта ғына тарих киләсәккә хеҙмәт итә ала.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

МОНОЛОГ

# САЛАУАТҠА ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ,

## йәки Мәңге балҡыр һинең һының

**(Лирик эссе)**

**Фани донъяға килгән һәр әҙәм балаһының яҙмышы баҡыйлыҡҡа күскәнсе ил, халыҡ яҙмышынан айырылғыһыҙ булыуы барыбыҙға ла мәғлүм. "Заман башҡа - заң башҡа", тигәндәй, һәр тарихи осорҙоң үҙенә генә хас ижтимағи, иҡтисади һәм сәйәси ихтыяждары булып, инсан да ошо заман ҡаҙанында ҡайнап йәшәйҙер. Берәүҙәр үҙенә яҙғанын күҙгә-башҡа артыҡ салынмай, тын күлдәге балыҡ һымаҡ шым һәм вайымһыҙ ғына йәшәп уҙғарһа, икенселәренең ғүмере, иркен тын алып була торған сафлыҡ алып килеүсе дәшһәтле, йәшенле-күкрәүле дауыл кеүек, тиҙ генә үтеп китә лә, халыҡ күңелендә һис юйылмаҫлыҡ эҙ ҡалдыра.**



Беҙ Салауат батырҙы ла ошондай дауыл тыуҙырған шәхестәр иҫәбенә индерәбеҙ. Беҙгә, уның хәҙерге замандағы ҡан-ҡәрҙәштәренә, Салауаттың изге исеме бала саҡтан уҡ таныш һәм ҡәҙерле. Шуныһы ҡыуаныслы, башҡорт батырының исеме бөгөн Рәсәйҙә генә түгел, донъяның күп илдәрендә танылыу табып, йөҙәрләгән телдәрҙә яңғырай. Беҙ, Ер кешеләре, Салауат, тибеҙ икән, батырыбыҙҙың һәр кем үҙенсә күҙ алдына килтергән һыны һаман да тере булғандай, Салауат батырыбыҙ ниндәйҙер бер мөғжизә менән баҡыйлыҡтан фанилыҡҡа яңынан әйләнеп ҡайтҡандай тойола. Ошо үҙе үлемһеҙлеккә тиң түгелме ни?

Урман-ҡырҙар өҫтөнән күкрәп-йәшнәп шифалы ямғырҙар яуып үтте лә, ялтлап ҡояшы ла килеп сыҡты. Сәскәле туғайҙар, иркен баҫыуҙар, күкһел тау һырттары өҫтөндә йәйғор балҡыны. Ниндәйҙер бер эске саҡырыуға буйһоноп, күк күкрәүенән ҡурҡынҡырап, баҡса өйөнә инеп боҫҡан ейәндәремә өндәшәм: "Ҡарағыҙ әле, ҡарағыҙ, Салауат күпере төшкән, ҡалай матур ул!" Бала сағыбыҙҙан уҡ ошо һоҡланғыс тәбиғәт күренешен беҙ халыҡса "Салауат күпере", тип атап өйрәнгәнбеҙ. Ни эшләптер, әҙәбисә, китапса яңғыраған "йәйғор" һүҙенә ҡарағанда, халыҡ телендәгеһе күңелгә яҡыныраҡ булып, әйтелеше лә һауалыраҡ, бейегерәк, күркәмерәк тойола.

Ниндәй фәһемле һәм хикмәтле икән был атама: күпме ҡабатлаһаң да иҫкермәй торған изге доға һымаҡ, милли батырыбыҙҙың исемен хәтеребеҙҙә яңыртып тора түгелме һуң ул? Хоҙай Тәғәләнең бер ғилләһе барҙыр ул ошо һүҙҙә: Тәңребеҙҙе маҡтау, данлау доғаһының, ғәжәйеп тәбиғәт күренешенең һәм данлы батырыбыҙҙың Салауат тигән бер үк исеме есемдәренә тап килеп, кешене тыуған ере менән, ә уның рухын мәңгелек менән тоташтырып тороусы бер илаһи күпергә бәрәбәрҙер ул.

Мин, Салауат күпере аҫтындағы фани донъяның бер инсаны, йәйғор нурҙарынан әҫәрләнеп, яҡты уй-хыялдар донъяһын гиҙәм. Мин бит кеше, ә кеше - фекер эйәһе, тимәк мин үҙемдең уй-фекерҙәремдең мәғлүмәти тулҡындарын Салауат күперенә табан йүнәлтһәм, ул ошо тулҡындарҙы, гигант бер камертондай, йыһан төпкөлдәренә тапшыра алыр һымаҡ...

Әгәр минә, башҡорттоң тиҫтәләгән азатлыҡ ихтилалдарында әүҙем ҡатнаша килеп, яртылаш ҡырылып бөткән Әйле ырыуҙар берләшмәһенең, Салауат батырҙың көҙәй ырыуына ҡан-ҡәрҙәш булған башҡорттарҙың бөгөнгө вәкиленә, Мәңгелек Зәңгәр Күккә олғашҡан батыр рухы менән ысынлап аралашырға яҙһа, уға нимәләр һөйләр инем дә, бөгөнгө хәл-торошобоҙҙо нисегерәк аңлата алыр инем? Шәхсән ике быуаттан ашыу әүәлерәк баҡыйлыҡҡа күскән батыр йәненең саф башҡорт телендә ниндәйерәк хәбәрҙәр көтөүен һиҙемләгәндәй һәм үҙемдең уға ниҙәр әйтеремде лә төҫмөрләгәндәй булдым:

- Һаумы, Салауат, һаумы башҡорт иленең мәңгелек батыры! Һинең баҡый донъяла ла башҡортлоғоң - баш ирлегеңде һаҡлап, үҙ асылына тоғро бер йыһангир йән булыуыңа ысын күңелдән ышанабыҙ. Үҙ илеңдән, сал Уралыңдан сәләмдәр көтөп зарыҡҡанһыңдыр инде: ике быуаттан ашыу ваҡыт дауамында бихисап үҙгәрештәр кисерелһә лә, туған халҡың иҫән-һау, Башҡортостан атлы тыуған илең имен-аман әле. Ҡаратауыңда һаман йөҙйәшәр имәндәр үҫә, йүгерек Йөрүҙәнең яҙҙар килгән һайын шаулап-гөрләп, әүәлгесә ташып-ашҡынып ала, Янғантауыңдың да янып бөтмәгәне раҫ.

Яҡташтарың ырыу-нәҫел ерҙәрегеҙҙең бөгөн һинең исемең менән аталыуына ифрат ҡыуанһа, ихлас ғорурланһа, бынан 78 йыл элек нигеҙләнгән Салауат ҡалаһы ла һинең ҡаһарманлығыңа бер һәйкәл булып ҡалҡты. Шөкөр, аҫыл хазиналай булған үҙ телебеҙҙә һөйләшәбеҙ, динбеҙҙән яҙа яҙһаҡ та, хәҙер күптәребеҙ Ислам хозу-

***✓ Нисек кенә булмаһын, Салауат, һинең образың бөгөн милли һәм дини сиктәрҙе лә уҙып китте. Башҡорт батыры ғына түгелһең, барса донъяның рухи батырҙарының береһе һин, Салауат!***

рына кире ҡайта бара. Мәңәр йылдар дауамында дәшһәтле тарих боролмаларында юғалып юҡҡа сыҡмаған халҡыбыҙ бөгөн дә, киләсәктә лә үҙ-үҙен һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген мотлаҡ табыр, тип ышанабыҙ.

Әлбиттә, көнитмешебеҙҙә, рухи тормошобоҙҙа барыһы ла ал да гөл түгел, изге батырыбыҙ: донъя бит, ағы ла, ҡараһы ла бар. Әммә ҡараңғы яҡта ҡалыусыларҙан яҡтыға ынтылыусылар күберәк, һинең дәүерҙә нисек булһа, хәҙер ҙә шулай. Исемең телебеҙҙән төшмәһә лә, рухи асылыңды аңлағандар күңеленә генә ул изге доға булып инә.

Һинә әйтер һүҙҙәрем әллә нисәмә көндәр буйы дауам итерлек телмәргә әйләнер ине, шуға күрә теләгәндәремдең, уйҙарымдың иң мөһимдәрен генә һайлап алырға мәжбүрмен. Ә иң мөһиме шул инде: халҡың һине онотманы, батшалар тарафынан тыйылған исемең уның йөрәгендә, күңел түрендә һаҡлана килде.

Юҡ, һин бөгөн бары тик хәтер, уй-фекер халатендә генә йәшәмәйһең, һине тормошобоҙ ысынбарлығы итеп ҡабул итәбеҙ. Мөһабәт һын-образың, һине һағынып-юҡһынып, халҡың сығарған йыр-ҡобайырҙарҙа, риүәйәт-легендаларҙа йәшәй, яҙыусы һәм шағирҙар йөҙәрләгән шиғыр-поэмаларында, хикәйәттәрендә, башҡа әҫәрҙәрендә һиңә дан йырлай. Төҫ-ҡиәфәтеңде һис бер ҡасан күреп белмәгән хәлдә лә, рәссамдар төҫлө буяуҙар сағылышында йөҙ-һыныңды ғына түгел, ҡомарланып-илһамланып, рухи булмышыңды һүрәтләргә ынтыла. Үҙең тотҡонлоҡ яфаларында ыҙа сиккән Өфөлә, Ағиҙелдең текә ярында мәңгеләккә туҡталып ҡалған ҡорос атлы һыбайлы башҡорт яугиры ла һин бит ул, Салауат! Әкиәттәрҙә һөйләнгән Ҡаф тауҙары иле инсаны, ғорур һәм саф күңелле осетин дуҫың Сосланбәк Тавасиев батырлығына, рухи ҡаһарманлығына үҙ ҡулдары менән ҡуйған мөһабәт һәйкәл ошолор. Әйтерһең дә, һин һаман заманаларҙың хәтәр елдәренә ҡаршы тороп, халҡыңды ирекһеҙләүгә бирешмәҫкә, хыянатҡа бирелмәҫкә өндәйһең. Тик шуныһын ғына өҫтәп әйтмәһәм, дөрөҫ булмаҫ ине: батырға ла ял кәрәк, тигәндәй, бөгөн һинең ошо изге һының ваҡытлыса урынынан алынып, яңыртылып, бронза һәйкәл булып ҡалҡып, Башҡортостанға килеүсе һәр кемде ҡаршы алып торасаҡ.

Һинең изге образың Тавасиевҡа ғына түгел, рус рәссамы Алексей Кузнецовҡа, скульптор Тамара Нечаеваға, яҙыусы Степан Злобинға, ғалимә Ирина Гвоздиковаға, шағирҙар Мостай Кәрим һәм Рәми Ғариповҡа, яҙыусы һәм ғалим Мирас Иҙелбаевҡа, башҡа бик күп Башҡортостан һәм Рәсәй ижадсыларына һоҡланғыс әҫәрҙәр тыуҙырырға дәрт-дарман биргәндер.

Һине иҫкә алғанда халҡыңдың үҙендә терелэй күргәндәй булған мәлдәре тураһында лә әйтеп үтәйем. Кино тип аталған заман сәнғәтенең мөмкинлектәре аша башҡорт егете Арыҫлан Мөбәрәков һинең тере һыныңды күҙ алдыбыҙға баҫтырһа, Заһир Исмәғилев исемле талантлы музыка оҫтаһы ижад иткән әҫәрҙә Мәғәфүр Хисмәтуллин тигән йырсыбыҙҙың Салауат булып йырлауы, уның йөрәк түренән сыҡҡан илаһи моңо кемдең генә күңелен тетрәтмәне икән? Былар барыһы ла, үҙе бер онотолмаҫ хәтирә булып, халыҡ күңелендә йәшәр.

Бөгөн йәшәйешебеҙҙә интернет тип аталған мәғлүмәт селтәре булып, унда Салауат Юлаев тигән исемдең әллә нисә миллион тапҡыр ҡабатланыуына шаһитбыҙ. Был үҙе үк бер ғәжәп күренеш түгелме ни? Тимәк, һинең ҡасандыр яуыз батшалар тарафынан мәңгегә тыйылған исемең, мәғлүмәт арауығында меңәрләгән саҡрым ерҙәрҙе күҙ асып йомған арала үтеп сыға ла, Ер шарының теләһә ҡайһы мөйөшөндә электрон экрандарҙа яҡтырып пәйҙә була. Нисек кенә булмаһын, Салауат, һинең образың бөгөн милли һәм дини сиктәрҙе лә уҙып китте. Башҡорт батыры ғына түгелһең, барса донъяның рухи батырҙарының береһе һин, Салауат!

Әйе, батырыбыҙ, һин бөгөн дә дуҫлыҡ, туғанлыҡ, берҙәмлек, арҡаҙашлыҡ өлгөһө булып, Башҡортостан тигән илебеҙгә хеҙмәт итәһең. Шуның өсөн дә йыл һайын йәмле йәй башында республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә һине хөрмәтләп, ҙурлап-ҡәҙерләп иҫкә алалар, быуаттар аша беҙҙең көндәргә килеп еткән аманатыңды йәш быуындарға тапшыралар.

Салауат күпере аҫтында торғанда бына ошондай уй-хистәр аң-зиһенемде биләп торҙо ла, бейек күктәргә олғашты, буғай. Иншалла, ил-йортобоҙ именаман тороп, ҡотло еребеҙ өҫтөнән Салауат күпере ҡалҡҡан һайын да, башҡа иҫтәлекле мәлдәрҙә лә Салауатыбыҙ телебеҙҙән төшмәҫ, күңел күктәребеҙҙә лә илаһи Салауат күперҙәре балҡыр.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ.**

*ШАҒИР ҺҮҘЕ*

# ЭЙ, УРАЛЫМ! ҺИНЕ ДАНЛАП,

## Һис арымаҫ телем

**Салауат Юлаевтың шиғырҙарын Р. Игнатьев русса яҙып ала һәм уның тәржемәһе 1922 йылда ғына донъя күрә. Башҡортостандың халыҡ шағирәһе Тамара Ғәниева был шиғырҙарҙы русса текстан яңынан тәржемәләне. Ике тәржемәне сағыштырып ҡараһаң, Игнатьев вариантында ҡайһы бер, мәҫәлән, Аллаһҡа илтифат, милләт тураһындағы юлдарҙың төшөрөлөп ҡалдырылғанын абайламай булмай. Шағирә был тәржемәне тәүгеләрҙән булып "Киске Өфө"лә баҫтырғайны инде. Тағы бер ҡабатлайыҡ, батырыбыҙҙың йөрәк һүҙен ишетәйек.**



* * *

Эй, Уралым!
Изге ерем!
Һинең хаҡта йырым.
Дан-тәкбирем,
Ә күңелгә
Яғыла яҡты нурың.
Эй, Уралым!
Изге ерем!
Аллаһ кеүек бөйөк,
Шундай бейек түбәләрең,
Күктең үҙе кеүек.
Төн күгендә ай балҡыһа,
Нурын һибеп ергә,
Көмөшләнә үркәстәрең
Һәм үҙе нур һибә.
Көн күгендә ҡояш ҡалҡһа,
Нурҙар ағыла ергә.
Алтынлана ҡаяларың.
Уттай яна түбә.
Эй, Уралым! Итәк тулы
Урман һәм тауҙарың.
Аҫыл балаҫ кеүек йәйрәй
Болон, баҫыуҙарың.
Сәскәләре шул балаҫтың
Йомарт иркә-наҙға.
Таңды маҡтай ожмах ҡошо -
Дан-йыр Аллабыҙға.
Иң моңлоһо - былбыл йыры,
Оҡшаш ул аҙанға.
Иртә таңдан мосолманды
Саҡыра ул намаҙға.
Эй, Уралым! Изге төйәк!
Ғәзиз ил-ватаным.
Тел аҫҡысы бирә миңә
Һәр бер яҡты таңың.
Эй, Уралым! Һине данлап
Һис арымаҫ телем.
Һиңә тигән йырҙарым да
Күп әле, күп минең.

* * *

Моңлана былбыл, моңлана -
Төндөң һилендә.
Алланымы, донъянымы
Данлай көйөндә.
Ай-йондоҙҙар, болондарға
Һоҡлана микән?
Әллә ҡояш нурын данлап,
Рухлана микән?
Белмәйем. Йәшә йылғаның
Ярын буйлатып
Көтөү юшай. Атым бәйле.
Тирмәлә ятып
Сыҙаманым. Асығыҙсы
Ишек ҡорғанын.
Ишетһен моңон былбылдың
Һәр бер туғаным.
Керпек ҡаҡманым.Тыңланым.
Моңланды былбыл.
Раббыбыҙҙың хозурына
Дан ине ул йыр.

* * *

Йәйә кирҙем, атҡан уғым
Тейҙе тик ҡарлуғасҡа.
Бахыр ҡошсоҡ томоролоп,
Сараһыҙ ауҙы аҫҡа.
Ауҙы ул аяҡ осома
Ҡарлуғас - байғошҡынам.
Нишләп уҡ тоҫҡаным күккә?
Хәҙер шуға бошонам.
Ҡул күтәрҙем икән ниңә
Һис кенә ғәйепһеҙгә?
Уғым тейһә, нимә булған
Бер кафыр сөннәтһеҙгә,
Аяҡ баҫҡан Аллаһыҙға
Беҙҙең йорт-еребеҙгә?
Килер ине азат көндәр
Иркен йәйләүебеҙгә.

* * *

Булған ул ҡаһарман ирҙәр
Бик борон-борон заман.
Булған Ғәли, Абуталип,
Саш булған һәм Нариман.
Уларҙы ил-ер таныған,
Белгән ниәт-уйҙарын.
Еңгән улар иң-иң көслө
Шул заман батырҙарҙан.
Улар күтәргән ҡылыстан
Кафыр баштары ауған.
Ҡурҡмағандар аждаһанан,
Хас дошман аҫҡан яуҙан.
Шайтан мәкер ҡора алмаған,
Өркмәгәндәр сихырҙан.
Батырҙарҙың батырлығы
Батырлыҡҡа саҡырған.
Бына шундай ҡаһармандар
Булған борон заманда.
Улар хаҡында риүәйәт
Дәрт арттырҙы ҡанымда.
Эйәрләнем дә атымды,
Атылдым яуға ҡаршы.
Алышта мин ал бирмәнем,
Тураным дошман башын.
Бер саҡ мине ҡамаланы
Өс йөҙләп яуыз сиреү.
Ҡамауҙан сыҡтым далама,
Эйәр өҫтөндә. Тере.
Йылғанан ятып һыу эстем,
Аят уҡыным шунан.
Яңынан яуға атылдым,
Ҡыйғыр ыласын һымаҡ.

* * *

Ҡарағош оса бик бейек.
Ыласын китә үтеп.
Ыласындан ҡыйғырыраҡ
Ҡоштар батшаһы - бөркөт
Һин әле йәш, яу сапһаң да
Түгелһең әле бөркөт.
Һыйын Аллаһ хозурына,
Ҡыйыу бул, яугир егет.
Батырлыҡ - Раббы ҡөҙрәте.
Ғәййәр ташлан алышҡа.
Кафырҙың башын ҡыйырға
Ҡөрьән-Кәрим дә ҡуша.
Бер Аллаһҡа һығынамын
Ҡулға алһам ҡылысты.
Беләм мин ҡырғыҙ мәкерен,
Унан яман урыҫты.
Илебеҙҙе, динебеҙҙе
Яҡлап баш һалһам әгәр,
Күктәр үҙе тәкбир әйтер,
Рухымды йәннәт биләр.
Ожмах баҡсаһында көтә
Мәңгелек рәхәт һине.
Хур ҡыҙҙары наҙлап һөйөр,
Юҡ унда бәхет сиге.
Ҡыйыу бул һин, яугир егет.
Ҡөҙрәт ал Раббыбыҙҙан.
Батырлыҡ көтә ул беҙҙең
Бөгөнгө яуыбыҙҙан.

* * *

Зөләйха, һин хур ҡыҙылай,
Аңласы йөрәгемде.
Ялҡынланам күрҙениһәм.
Күк төҫлө күҙҙәреңде.
Ҡарашыңда ай балҡышы,
Сағыла унда йондоҙ.
Күңелең тәрән. Ожмах үҙе
Көнләшер һинән, нур ҡыҙ.
Зөләйха! Һине яратам,
Нисек әйтәйем шуны?
Томаланған аңым, сөнки
Һөйөүҙән күңелем тулы.
Аңлатыуы ҡыйын икән
Ихлас, саф яратыуҙы.
Тел осомда тик бер һүҙем:
Зөләйха! Һин хур ҡыҙы!

**Тамара ҒӘНИЕВА**
**тәржемәһе.**



*Баймаҡ районы Ҡолсора ауылы ваҡиғаларына нигеҙләнеп яҙылды. Шул хәлдәрҙе һөйләгән Бибинур апайға рәхмәт еткерәм.*

Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА

# ИР ҺҮҘЕ

Хикәйә

–Урлик ҡайтҡан! Ура! - Балалар ҙа кемуҙарҙан сылалашты.

- Бында ҡайтып ингәнен юлда берәүгә лә һөйләмә. Олатаңа ғына әйт, - тип Ғәйниямал әбей улын ҡат-ҡат иҫкәртте.

Бер аҙҙан ах та ух итеп, Шәрифулла ҡарт килеп етте. Иштуғанды әүрәтеп, уйын уйнатып маташҡан Бибинур бер ыңғайҙан ололар һөйләшкәнгә лә ҡолаҡ һалды. Быны бригадир олатай атты әйләнеп ҡарап сыҡты, баш сайҡаны. Өләсәһе янына килеп:

- Ауыҙлығын өҙөп ҡасҡан, - тине. - Поезға тейәй алмағандар...

- Күрҙем үҙем дә. Өҙгән. Тик хәҙер нимә эшләргә? Ни хәл итергә?

- Нисә йөҙ саҡрым юл үтеп, тыуған еренә ҡайтып еткән толпарҙы нимә эшләтәбеҙ, тип... - ҡарт тамаҡ ҡырҙы. Тауышын баҫыбыраҡ дауам итте. - Аңғараһың үҙең дә...

- Аңлайым. Тик нисек?... - Өләсәйҙең тауышы шөбһәле.

- Ҡара әле, еңгәй. Әйҙә, үҙебеҙсә әмәлләйек уны. Килеп тикшереүселәр була ҡалһа, Урлик имгәнгән. Үҙең беләһең, сирле ат кемгә кәрәк?

- Беҙҙең баш иҫән ҡалырмы? - Өләсәй маңлайын һыпырҙы.

Был һүҙҙе ишеткән Бибинурҙың да кинәт йөрәге даҫлап типте.

- Өләсәй, - тип өндәшкәнен һиҙмәй ҙә ҡалды.

- Иштуғанды ҡара, балам, - тине ҡәтғи тауыш менән өләсәй.

Ололар ситкәрәк китте, артабан ниндәй һөйләшеү булғандыр, быларын ҡыҙыҡай ишетмәне.

Бригадир йөһәт кенә Орликты әүеҫлеккә индереп бикләне. Өләсәһе аттың бер аяғын сепрәк менән ураны, арҡаһына ла нимәләр һөрттө, аттың тиреһе тимгел-тимгел үҙгәрҙе. "Ул ысынлап та сирле атҡа оҡшап китте", тип уйланы ҡыҙыҡай.

Орликты юллап, кире алып китәм, тип, даулашыусылар булдымы-юҡмы, быныһын Бибинур белмәй. Иллә-мәгәр Дим станцияһынан әйләнеп ҡайта алған атты Шәрифулла ҡарт ҡына екте. Әхмәҙиәне лә кәрәк саҡта үҙенә күсер итеп алды. Ҡыҙыҡай быға сикһеҙ шат ине.

* * *

Әсәһенең бер туған апаһы Рәүә инәй Бибинурҙарҙың өйөнә һирәк-һаяҡ ҡына булһа ла, инеп сыға. Икмәк йә ҡорот киҫәге ҡалдырып китһә, өйҙә ысын байрам була. Балалар Рәүә инәһенә бик бара ла алмайҙар, сөнки уның бабайы уҫал. Ирдәүләт ҡарт уларҙың килгәнен яратмай, күреү менән йөҙө ҡарая.

Шулай ҙа аслыҡ был юлы үҙенекен итте. Бибинур ҡустыһын етәкләне лә, инәйҙәре торған яҡҡа атланы. Ҡапҡанан инеүҙәре булды, ишек алдында эш менән булышып йөрөгән Ирдәүләт ҡарт әбейен әрләй башланы:

- Былай ҙа урам тулы хәйерсе! Һин уларҙы саҡырып килтерәһең!

- Хәҙер ҡайталар, ҡарт, хәҙер. Өләсәләрен Ишейгә алып киткәндәр, бер ат ҡазаланған...

Рәүә инәй йәтимдәрҙе ишек алдынан йәһәтләп сығарып ебәрҙе, урамда берәр йомортҡа тотторҙо.

- Ҡайтҡас, бешереп ашарһығыҙ. Иплән тотоғоҙ, ватып ҡуймағыҙ.

Бер аҙ бара биргәс, Иштуған йомортҡаны тегеләй ҙә, былай ҙа әйләндереп ҡараны, бармағы менән төрттө.

- Апай, ул ташмы?

- Түгел! Тауыҡ күкәйе! Өләсәй бешереп ашата.

- Ҡаты бит. Ҡалайтып бешерә?

- Бир үҙемә, әтеү, һин аңра, һытып ҡуйырһың...

Өләсәләренең ҡайтыуын дүрт күҙ менән көтөп алдылар. Иштуған йомортҡаны ашағанда, ләззәтләнеп күҙҙәрен йомдо.

- Иң тәмле күкәй! Их! - Шунан Иштуған күҙҙәрен селселт йомоп, апаһына ҡарап алды. - Тағы кәрәк...

- Тауыҡтарыбыҙ юҡ! - Рәүә инәйҙәргә китеп бармаһын тип ҡурҡҡан Бибинур ҡустыһына ҡаты ғына өндәште.

- Тауыҡ уны ҡайҙан ала?

- Алмай, һала.

- Ҡалайтып һала?

"Ҡалайтып һала?" Быны Бибинур үҙе лә белмәй. Ауыҙын бәлшәйтеп, иңбашын һикертте, шул саҡ башына шәп фекер ҙә килде.

- Өләсәйемдең түшелдерәге бар бит. Унан икмәк, ҡорот сығарып бирәме? - ул һуҡ бармағының осон күрһәтте, был ризыҡтың ҡайһы ҙурлыҡ икәнен аңлата ине.

- Бирә.

- Бында шулай. Тауыҡтың түшендә күкәй ята. Шуны сығарып бирә.

Уларға хәҙер күңелле, тауыҡ булып уйнайҙар, ҡанат ҡағыналар, түштәренән күкәй генә түгел, икмәк тә "сығаралар". Эйе, тамаҡ туҡ булһа, күңелле шул, гел көлгө, гел уйнағы ла килә.

* * *

Ауылда тағы ла бер хәбәр таралды: "Динислам ағай һуғыштан сатан булып ҡайтҡан". Ҡыҙҙары Сәғирә менән Мәүлиҙә бөтөн кешегә "Атайым ҡайтты!" тип һөйөнсөләйҙәр. Бибинур Динислам тигән кешене хәтерләмәй. Ниндәй була икән ул "атай" тигәндәре? "Бына шулай була", тигән һымаҡ, аталарын етәкләгән Сәғирә менән Мәүлиҙә урам буйлап китеп баралар, боролоп-боролоп тирә-яҡҡа ҡарап алалар, йәнәһе, бөтәндәр уларҙы күрәме-юҡмы. Күрәләр, әлбиттә. Бәләкәй Иштуған әлегә бер нәмә лә аңламай. Ул ят кейемле ҙур ағайға аңшайып ҡарап торҙо, шунан апаһына бороллдо, бармаҡ менән күрһәтеп:

- Кем ул? - тип һораны.

- Ул атай. Мәүлиҙәнең атаһы. Сәғирәнең атаһы.

- Атай, - Иштуғандың ауыҙы йырылды. Бына ниндәй кеше ул Атай! Кейеме лә икенсе. Ауылда ундай кейем берәүҙә лә юҡ.

Икенсе көндө мыжырға тотондо.

- Атайҙы күрәйек!..

Бибинурҙың да "атай"ҙы яҡынданыраҡ күргеһе килә. Ул бит үҙенең атаһын хәтерләмәй. Бәлки, атаһы Динисламағайға оҡшағандыр? Ике бала етәкләшеп, һалдат ҡайтҡан өйгә киттеләр. Динислам ағай тышта һәнәк һаплап ултыра ине. Уны күреү менән Иштуған ҡысҡырып ебәрҙе.

- Атай!

Динислам ағай башта аптырап китте, шунан был бәләкәстең атайҙы бер ҡасан да күргәне булмауын аңлап, йылмайҙы.

- Әйҙә, улым! Күрәшә беләһеңме? Яҡшы! Мылтығың бармы? Әхмәҙиә ағайыңа әйт, ағастан эшләп бирһен!

Иштуған "Атай"ҙан ҡыуанып ҡайтты. Өйгә инеү менән ҡысҡырып ебәрҙе:

- Өләсәй, атай! Атай унда! Әбей тертләне.

- Ҡайҙа? Нимә һөйләй был бала? - тип албырғап китте.

- Динислам ағайҙы "атай" ти ҙә ҡуя, - тине Бибинур ғәйепле тауыш менән.

- Эй-й-й... Сабый атайҙың кем икәнен белмәй шул. Нисек аңлатырға инде... - тип көйөләндә Ғәйниямал әбей, шунан һандыҡтан улдарының кәртешкәләрен сығарҙы. Мөхәмәҙиәнең хәрби кейемдә фотоһы юҡ шул, бында күлдәксән генә төшкәнә бар. Ғиниәтулла - һалдат кейемендә. Иштуған иң тәүҙә Ғиниәтулланың кәртешкәһенә үрелде.

- Атай! - Шунан атаһының һүрәтенә ҡараны. - Был да атаймы?

Хәрби кейемле кешеләрҙе "атай" тип йөрөтәләр, тип уйланы Иштуған. Улай түгеллеген сабыйға төшөндөрә алманылар.

* * *

Һуғышҡа ғаиләнән иң аҙаҡҡы булып киткән Абдрахман ағаларының үлем хәбәре килде. Өләсәйҙең күҙенән йәш кипмәй. Уға ҡыйын булғас, балаларға нисек күнелле булһын инде? Өйҙә шомло тынлыҡ. Хәйер, Ғәйниямал әбейҙең ҡайғырырға ла ваҡыты юҡ, ат бағырға тип, йәнә күрше ауылға саҡырҙылар. Киске ҡайтып етермен, тиһә лә, күренмәне. Сабыйҙар өйҙә лә ашарға нәмә тапманылар, түҙер әмәл ҡалманы.

- Рәүә инәй... - тип мыжыны Иштуған.

- Әйҙә!

Ҡарттан ныҡ ҡурҡһа ла, Бибинур ризалашты. Етәкләшеп сығып киттеләр, тегеләрҙең ишек алдына индәләр ҙә, ҡатып ҡалдылар. Сөнки ҡаршыларына Ирдәүләт ҡарт үҙе килде лә сыҡты.

- Бөтмәҫ был етем-еһерҙәр! Үҙебеҙ хәҙер астан үләйекме!- тип екерҙе өй тупһаһында күренгән әбейенә.

- Ҡарт, улай тимә инде...

- Нимә, улай тимә! - ҡарт ҡулындағы сыбыртҡыһы менән әбейенә һелтәне. Быны күргән балалар урам яғына "жыйт" итеп кенә ҡалдылар. Өйгә ҡайтҡансы Иштуған иланы, тик Бибинур уны нисек йыуатырға ла белмәне.

Бәхеткә күрә, Әхмәҙиә ағалары ҡайтып инде.

- Йә, шунан, нимә эшләйһегеҙ? Өйҙә генә булдығыҙмы? Уйнанығыҙмы? Тағы хәйерселәп сығып китмәнегеҙме? Ҡарағыҙ уны! Өләсәй күрәгеҙҙе бирер.

Туғандар "юҡ", тип баш сайҡаны. Эйе, уларға ҡай саҡ ауыл урамын ҡыҙырырға тура килә. Кемдер ҡыҙғанып, берәй сөхәри, картуф ҡабығы биреп тә сығара. "Кемгә кәрәк был йәтимдәр?" тип һөйләнгәндәре лә бар. Ләкин уларға барыбер. Бөгөн нимәләр йоттоң, һин бәхетле.

Әхмәҙиә кеҫәһенән бер ус һоло сығарҙы.

- Быны күрҙегеҙме? Тик берәүгә лә күрһәтмәгеҙ, йәме! Хәҙер ҡурып бирәм.

Балалар сыр-сыу килеп һоло бөртөктәренә йәбеште.

- Беҙ бай! - тине Бибинур.

- Бай,- тип ҡабатланы ҡустыһы был һүҙҙең мәғәнәһен аңламаһа ла.

Иртәгәһен йоҡонан уянғанда бәләкәс Иштуған өйҙә юҡ ине. Бибинур йоҡоло күҙҙәрен ышҡый-ышҡый тышҡа сыҡты. Иштуған ҡаршы яҡта йөрөй, эргәһендә бер нисә бала күренә.

- Нишләп сығып киттең? - тип шелтәләне Бибинур. Иштуғандың усында бер нисә бөртөк һолоно күргәс, "Ағайым бит күрһәтмәҫкә ҡушты", тип йоҙроҡ күрһәтте.

Ул ағаһының ни өсөн күрһәтмәҫкә ҡушҡанын аңламай, әлбиттә. Ярамай икән, ярамай! Бәләкәс Иштуған ауыҙына ҡапҡан һолоноң һорауһыҙ алынғанын да, а бының енәйәт һаналғанын да ҡайҙан ғына аңлаһын, ти инде?

Ике көндән Бибинурҙарҙың өйөнә оҙон-оҙон бер нисә ағай килеп инделәр ҙә, шарт та, шорт өйҙә нимә бар, бөтәһен дә алып сығып киттеләр. Берҙән-бер тороп ҡалған нәмә кәзә тиреһе ине. Уға теймәнеләр, сөнки ҡоттары осоп, мөйөштә боҫҡан Бибинур менән Иштуған шул тирене ябынып, бөршәйеп кенә ултырҙылар. Әхмәҙиәне Түбә төрмәһенә алып киттеләр. Был хәлде ишетеп, Ишейҙән туған тейешле Фәйрүзә исемле апай килеп етте. Ул йәһәтләп ауыл халҡынан ҡултамға йыйырға тотондо: "Әхмәҙиәнең атаһы ла, ағалары ла фронтта. Үҙе ике йәтимде ҡарай". Бибинур шул саҡта яҡшы кешеләрҙең күберәк икәненә ышанды. Фәйрүзә апай бер нисә көндән Түбә төрмәһенән ағаһын алып ҡайтты. Был саҡта инде Бибинур менән Иштуғанды Темәс балалар йортона алып китергә тип килгәндәр ине. Әхмәҙиә туғандарын ҡосаҡлап алды:

- Бирмәйем! - тине ҡаты, уҫал тауыш менән.

- Унда туғандарыңдың ашарына, кейеренә була...

- Атайым ҡайтып төшһә, нимә тип әйтәм? Мин уға һүҙ биреп ҡалдым!

- Ниндәй һүҙ?

Әхмәҙиә тура ҡарап баҫты:

- Ир һүҙе!

Был тәүәккәл тауыштан етемдәрҙе алырға килгән апайҙар ҙа юғалып ҡалды. Тартҡылашманылар ҙа, өгөтләмәнеләр ҙә. Хәйер, бәләкәстәрҙең күҙҙәренә ҡарап та нимә теләгәндәрен аңлағандарҙыр. Туғанлыҡ - көслө тойғо...

**(Дауамы бар).**

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# ҺАЛДАТ ӘКӘМӘТТӘРЕ

**Күренекле фольклорсы-ғалим Әхмәт ағай СӨЛӘЙМӘНОВ гәзитебеҙҙең даими авторы һәм дуҫы булды. Ул редакциябыҙға ла йыш килеп йөрөп, төрлө фекер-кәңәштәрен еткерер, борсоулы хәлдәр тураһындағы хәбәрҙәре менән уртаҡлашыр ине. Ағайыбыҙ Бөрйән районы Иҫке Монасип һәм Нәби ауылдарында ишеткән ошо мәҙәктәрҙе әленән-әле, ҡабат-ҡабат һөйләп көлдөрөр ине. Уларҙы гәзитебеҙҙә лә баҫтырып сығаргайныҡ. Бөйөк Ватан һуғышы башланыуҙың 85 йыллығын билдәләгән Хәтер һәм ҡайғы көнөндә (22 июнь) ошондай йәшәү көсөн юғалтмаған оло быуын ағайҙарыбыҙҙы ла иҫкә төшөрәйек әле.**

"Мәғлүмдер ки, һәр ауылдың үҙ мәрәкәсеһе була. Уны хатта ауылдың Хужа Насретдины тип тә йөрөтәләр. Ундай кешеләрҙең күптәре: "Туҡта әле, кешегә бер ҡыҙыҡ яһайым. Көлөшөп алһындар әле," - тип әйтеп тә тормай. Юҡ, киреһенсә, уларҙың етди ҡылаңыуы ла, шаҡырына биреп, булмағанды булды, тип, яһап һөйләүе лә көлкөгә сәбәпсе булыусан. Бына шундайҙарҙың барыһын да көүҙәләндереүсе яҡташтарым хаҡында бер-ике кәлимә",- тип яҙып ҡуйған Әхмәт ағай яҙмаһың кәрзиненә.

### Кирам ағайҙың түчнәй ваҡытты түчнә әйткәне

Беҙҙең ауылдың күршеһе Иҫке Монасип (Һарт) тигән ауылда Исмәғилев Кираметдин тигән ағай бар ине. Аҙаҡ мәғлүм булыуынса (ысынмылыр, бушмылыр), һуғышта ул ерләү (похоронный) командаһында хеҙмәт иткән. Әммә яуҙан ҡайтҡас (яңылышмаһам, яраланыпмы, нисек, Енеүгә тиклем үк ҡайтып, ферма мөдире булып эшләй ине), бынан тегеһен дә, бынығын да һорашалар, яу хәлдәрен белешәләр. Ул ваҡытта ауылда радио юҡ, ысвит юҡ, сәғәт юҡ. Бөтә яңылыҡты килгән-киткәндән дә, үткенсенән һәм телефонлы кәнсәләрҙән белешеп тора халыҡ. Кирам ағай яуҙан ҡайтып төшкәс, ауылда быны ҙур ваҡиғалай күреп, былай тип һөйләнгән халыҡ:

- Ул һуғыштан кеҫә сәғәте алып ҡайтҡан...
- Уның ҡул сәғәттәре лә бар икән...

Тура килгәнендә, кәрәкһә-кәрәкмәһә лә, ауылдаштары бынан ваҡыт һораша икән. Әллә ҡайҙан уҡ ялтырап күренеп торһон өсөн, еңе төрөлгән беләгендәге ат башындай ҡул сәғәтенә ҡарап ала Кирам ағай:

- Аһ, быныһы туктаған, ахырыһы, - тип кәләфейенең сәғәт һала торған кескәй кеҫәһенә тығыла. Унан сылбырлы сәғәт сығарып, ҡарап ала ла:
- Атаҡ, быныһы артта ҡалған икән, - тип ҡуя, ти. Шунан инде ваҡыт һораусыға һыртын ҡуйып, эске салбарының кеҫәһенә тығыла, унан - өсөнсөһөнә. Һуғыштағы хеҙмәтенең хикмәте: сәғәттәре һаһынса кәләфейә, кәләфейә һаһынса - сәғәте. Һуңғы сәғәтен һелкеп-һелкеп тора ла:
- Әллә контузия гәләмәте, әллә ни. Заводить итергә онотола ла ҡуйылына, - тип, һуңғы сәғәтен иң эстән кейгән салбары кеҫәһенә тыҡҡас, ҡояшҡа күҙ һалып:
- Түчнәй ваҡыт - бер! - тип ҡуя торған булған, ти (немецтың штампланған сәғәттәрен йыйған да йыйған имеш, ағайыбыҙ).

### Әхмәтулла ағайҙың әфисәрский повар булғаны

Һуғыштан һуң колхоз эше менән ҡырҙа яткандамы, ҡайҙа, беҙҙең Нәбиҙән Хисмәтуллин Әхмәтулла ағай нәүбәт буйынса әҙерләгән аш-һыуҙы ауыҙ иткәндә, егеттәр быны бик маҡтай икән.

- Ошо Әхмәтулла ағай әҙерләгән аш гел тәмле була ул.
- Теленде йотторор, өнһөҙ ҡалдырмалы инде!
- Аштың ашы кем ҡулы тейеүгә ҡарай шул ул!
- Ә кәк же, әфисәрский повар дәрәжәһенә тиклем үрләгән кеше әле ул был дәдәгеҙ, - тип әйтер булған дежур ашнаҡсы быңдай саҡта. Йүкә шына үҙенең тәьҫир итеү һөҙөмтәһен күрһәткән сақтарҙа Әхмәтулла ағай ашнаҡсы бурысын нәүбәтһеҙ ҙә атҡарыр булған...

### Кирам ағайҙың Кутузов менән бергә хеҙмәт иткәне

Һуғыш хәлдәре хаҡында һүҙ сыҡҡанда, шыттыра биреп һөйләргә әүәҫ икәнен белеп алған егеттәрҙән берәү:

- Кирам ағай, һуғышта күпте күргән кешеһең, - тип һалпы яғына һалам ҡыҫтыра биреп, һүҙ башлауға, Кирам ағай:
- Күреләнде инде, күреләнде, - тип ҡуя икән, тамағын ҡыра биреп.
- Кутузовты күрергә тура килмәнеме?
- Кәк тура килмәнен! Шәп кеше ине. Осраған һайын: "Йә, Кирам ағай, хәлдәр нисек? Еңгәй хат яҙамы? - тип һорашып тора торғайны. - Урыҫ булһа ла, үҙ башҡортоңдан артыҡ ине...
- Теге, Верховныйҙың йөҙ грамын да бергә күтәргән сағығыҙ булғандыр әле?
- Бына һинең менән мин ултырған һымаҡ яҡын ултыр ҙа, кәк булмаһын! Булды. Ҡайһы ваҡытта; "Кирам ағай, киленеңде уйҙап, эс бошоп китте әле", - тип, Верховныйҙан үҙенә тейгән өлөштө лә минең кружкаға ҡоя ла: "Йә берҙе йырлап ебәр әле, яратам мин башҡорт йырҙарын", - тигән булыр ине. Мин ҡайтҡанда, илап тороп ҡалды, бахыр...

Шулай итеп, Кирам ағай улай-былай ғына кеше түгел ине. Уның хеҙмәттәше Кутузов булған, Кутузовтың серҙәше Кирам ағай үҙе булған.

### Әхмәтулла ағайҙың осоусы була яҙғаны

-...Шулайтып, һуғышып йөрөп ятыла. Бер мәлде минә хәбәр итәләр, комполканың связнойы һине эҙләй, - шулай тип башланы, ти, Әхмәтулла ағай сираттағы яу хәтирәләрен.

- Шунан, шунан, - тиҙәр икән егеттәр.
- Шунан ни, бойороҡ бирәм: "Әйтегеҙ унда! Керһен, рас мине эҙләгәс".

Керә связной:

- Иптәш Хисмәтуллин, һине срочно штабҡа саҡырталар, - ти, честь биреп тороп.

Барҙым штаб тигәндәренә. Ҡараһам - күмәәәәк йыйылышып киткәндәр. Аҡ халатлылары ла бар. Петлицаһына генерал йондоҙо таҡҡандары ла бар. Генералдарҙың өс йондоҙлоһо үҙе тороп күрешә лә:

- Йә, иптәш Хисмәтуллин, хеҙмәт барамы? Йонсотмаймы, асыҡтырмаймы?
- Никак нет! - тим. "Йонсорға ваҡыт юҡ әле ул, немец теңкәгә тейә", тип әйтергә итәм дә ул, тартындыра. Не положено, етмәһә. Оҙон тәбәрәккә төшөп, гәпләшер ваҡыт түгел.

Шунан былар минең инемде, буйымды, ауырлығымды үлсәп тороп, ҙууур ҡаҙан эсенә ултырттылар. Шул хәтлем ҙур ул ҡаҙан. Әгәр унда аш бешерһән, ошо беҙҙең өс ауылдан торған Сталин колхозы халҡы туйыр ине. Шул арала күмәкләп тороп тотондолар бит былар ҡаҙаны өйрөлтөргә. Эй өйрөлтәләр, эй өйрөлтәләр. Шунан һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?

Шунан тағы тотондо былар өйрөлтөргә, шунан тағы һорайҙар:

- Башың әйләнәме, иптәш Хисмәтуллин?
- Юҡ, - мин әйтәм.
- Улай булғас, һин лутщик, иптәш Хисмәтуллин! - тинеләр.
- Слушаюсь! - тигән булдым генералға.
- Шунан, шунан?
- Шунан ни, һуғыш ҡыҙып китте. Минең ҡайғым да онотолдо, ахыры. Тегеләй булһа, бер нәмә итеп, яраплан менән ҡайтып төшөләнә ине, ҡустылар, Нәбигә...

### Әхмәтулла ағайҙың Гитлер менән осрашҡаны

Әхмәтулла ағай һуғышта күпте күргән. Хатта Гитлер менән осрашҡан кеше ул. Был турала бына нисек һөйләр булған ул.

...Немецты өтөп алып киттек бит инде бер ваҡыт. Көнөнтөнөн ҡыуылына был кафырҙы. Һыпырталар ғына. Шулайтып, Берлинға ла барып инеләнде. Кругом - атыш та ҡысҡырыш. Тегенән дә аталар, бынан да, ҡыйыҡтан да, аҫтан да. Бер мәл атыш бәләкәй тымғайны, кит тә бар мин теге Рейхстаг тигәндәрен ҡарарға. Политруктар аңлатҡандан беләм бит инде. Ул где-то Центрҙа булырға тейеш. Тик яңылышмаҫка ғына кәрәк. Ҡала һинә - ауыл түгел. Өйҙәрҙе бер-береһенә оҡшатып һалалар. Рейхстаг тигәне кеүек йорт та булыуы бар бит. Ҡалайтһам иттем, немецтең бер гәзитенең өҙөгән табып алдым. Ҡараһам, мин эҙләгән йорттоң һүрәте тора. Карта буйынса барамы ни! Һүрәтте тотоп алыңылган, китеп барылына, китеп барылына, туктамайса һис тә һис. Танылым бит тегене. Хәҙер уратып ҡарап йөрөйөм быны, ҡарап йөрөйөм. Шулайтып, ҡарап йөрөһәм, бер тимер ишек күреп ҡалдым. Асып ебәрһәм... һыртын ҡуйып, Гитлер тора. Миндә эше лә юҡ, ҙур бер тимер һандыктан икенсе тимер һандыкҡа аҡса бушата. Аҡсала эш юҡ. Эстән генә: "Әһ-һә, әлэктенме, спулыш!" - тип, тегенең ата-инәһен дә телгә ал да мин, бара килеп быныың к...тенә тип тә ебәр! Типкән ыңғайға, теге кәксәйеп китте лә башы менән оло тимер һандыкты төкөнә. Кәксәймәҫ ерҙән кәксәйерһен! Төкөмәҫ ерҙән төкөрһөн! Һуғыш башындағы кеүек обмоткалы ботинка түгел ине шул ул ағайыбыҙҙың аяғында. Әфисәрский күн итек. Етмәһә, уның өр-яңы сағы. Дағалы ла ине. Мин типкәс, теге ништәй инде? Әбижәтсә итә: "Ошо Хисмәтуллин булһа, к...ткә тибер ҙә йөрөр ул!" - ти.

Типтем шул. Ҡайҙа тиберге һорап тора буламмы!

БЫНА ШУЛАЙ!

# САЛАУАТ ҺҮҘЕ...

## халҡыбыҙ телендә

**Батырға бағышланған йырҙар хаҡында һөйләгәндә, дүрт юллыҡ исемһеҙ йырҙар араһында Салауаттың авторлығы һиҙелеп торған текстарҙың барлығы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлил.**

Шундай йырҙарҙың береһе, мәҫәлән, Салауат отрядтарының Һатҡы заводы тирәһендәге уңышһыҙ яуҙары хаҡында:

*"Йәмле лә Әйҙең туғайы,*
*Һыҙғырһаң да сыҡмай турғайы,*
*Һатҡы ла завод бик ҙур, тиҙәр -*
*Һис килтереп булмай уңайын".*

Йырҙар ниндәй фекер уята? "Һатҡы урынлашҡан ер башҡорттарҙыҡы булған. Һатҡы заводсыларын ҡыуыу өсөн Салауат бер нисә тапҡыр килеп һуғыш асҡан", - тиелә тексттың һөйләүсе тарафынан әйтелгән сәсмә өлөшөндә. Оло Ҡатау заводына яһалған һөжүм ваҡиғаларына бәйле йырҙа ла авторлыҡ башланғысы аныҡ күҙаллана:

*"Оло ла Ҡатау, ай, күперен,*
*Яртылағас, ҡалдым сығалмай.*
*Боролдом кире, ай, нишләйем,*
*Донъя тулы дошман, ай, утә(а)лмай".*

Салауатҡа бағышланған халыҡ ижады әҫәрҙәрен арымай-талмай йыйыусы Ғ.Н. Үмеркәев яҙмалары араһында Салауаттың уңышһыҙ яуҙарҙан һуң тыуған хәсрәтле уйланыуҙарын сағылдырған түбәндәге дүрт юллыҡты ла яуҙы ситтән күҙәткән йә уның тураһында ишеткән кеше тыуҙыра алмай:

*"Уңлап та һуллап сабышырға*
*Үтмәҫләнде бәнем ҡылысым.*
*Дошман яуҙары, ай, араһында*
*Һис булманы бәнем белешем".*

Салауат Юлаев тураһындағы риүәйәттәр хәҙерге Башҡортостан райондарында ғына түгел, шулай уҡ унан ситтә - башҡорттар күпләп йәшәгән Силәбе, Свердловск, Пермь, Ырымбур өлкәләрендә лә осрай. Шулай ҙа уның тыуған ере Салауат районында һәм күрше Ҡыйғы төбәгендә күберәк. Сәсмә текстҡа йыр, күпселек осрактарҙа Салауаттың үҙенең йырҙары индерелгән риүәйәттәр ҙә осрай. Хикәйәләүгә йыр индереп, уны һөйләүселәр батырҙың шиғри талантын, йырсылыҡ һәләтен күрһәтергә теләгәндер, моғайын. Салауат тураһындағы халыҡ хикәйәләре тәрән социаль йөкмәткеле, демократик йүнәлешле булыуы менән айырылып тора. Башҡорт ерҙәренең рәхимһеҙ таланыуы, түләп бөтөргөһөҙ яһаҡтар, халыҡтың икеләтә ҡыҫым аҫтында йәшәргә мәжбүр булыуы риүәйәттәрҙә гәжәйеп көслө фашлана.

Милли һәм социаль иҙеүгә ҡаршы көрәштә рус хеҙмәтсән халҡы менән бергә сығыш яһауҙың зарур икәнен аңлай алыуы һәм халыҡҡа таянып эш итә белеүе Салауатты башҡа бик күп ихтилал етәкселәренән өҫтөн иткән һәм юғары тарихи шәхес дәрәжәһенә күтәргән.

Йырҙарҙың береһендә Салауаттың ижтимағи-сәйәси ҡараштары асыҡ билдәләнә, ил мәнфәғәттәрен иненә йөкмәгән оло шәхестең уйланыуҙары яҡтыртыла:

*"Тәҙрә аша уктар атһам,*
*Былбыл тигән ҡошто уята.*
*Бөйөккөнәй дәүләт, ҙур важибәт*
*Татлы йоҡоларҙан уята".*

Күренеүенсә, авторлыҡ билдәләре килтерелгән текстарҙың йөкмәткеләрендә генә түгел, бәлки, әҙәби, шиғри стилгә тартым поэтикаһында ла сағылыш таба.

**Филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев ордены кавалеры Фәнүзә НӘЗЕРШИНА яҙмаларынан.**

***✓ Граждандар һуғышы мәлендә ҡулға алынған Шәйехзада Бабичты ҡыҙылдарҙың Исҡужа ауылы аша Йылайырға алып китеп барған мәленең дә шаһиты булғанын һөйләгәйне бер мәл олатайым.***



ИНТЕРНЕТТАН



# АҠ СӘСКӘ ДАУА ҒЫНА

Яланда үҫкән аҡ сәскә стресс, нервы көсөргәнеше һәм хәүеф тойғоһонан ҡотолорға ярҙам итә. Ул хатта химик юл менән яһалған ҡиммәтле тынысландырыусы дарыуҙарҙы ла алыштыра ала. Аҡ сәскәнең файҙалы яҡтарын ғалимдар ҙа тикшереп ҡараған. Эксперимент барышында аҡ сәскә төнәтмәһе ҡулланыусылар стресс һәм хәүеф тойғоһонан тулыһынса арына алған. Аҡ сәскә төнәтмәһе сәләмәтлеккә зыян килтермәй генә йоҡоһоҙлоҡтан дауалай, шулай уҡ артыҡ әүҙем балаларҙы тынысландырырға ярҙам итә. Аҡ сәскәнең файҙалы сифаттары ысынлап та бик уникаль, сәскәнең бай химик составы уны төрлөсә ҡулланырға мөмкинлек бирә, ти ғалимдар. Уны юҡҡа ғына халыҡ дауаһында ҡулланмайҙар. Аҡ сәскә сәйе, мәҫәлән, үт ҡыуығы менән ашҡаҙан эшмәкәрлеген көйләй. Шулай уҡ тын юлдары инфекциялары мәлендә ул бик файҙалы. Аҡ сәскә сәйен шәкәрһеҙ эсәләр.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, музыканттарҙың хәтере башҡа кешеләрҙекенә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ. Ғалимдар үткәргән һынауҙарҙа 14 музыкант һәм музыкаға бер ҡыҫылышы ла булмаған 15 кеше ҡатнашҡан. Уларҙың барыһына ла картиналар йәки һүҙҙәр йыйылмаһы тәҡдим ителгән. Шул уҡ минутта улар әле генә күргән һүрәттәрен йәки һүҙҙәрҙе икенсе өйөмдә ятҡан картиналар араһынан һайлап алырға тейеш булған. Музыканттар ике осраҡта ла эште тиҙерәк башҡарған һәм һирәгерәк яңылышҡан. Музыкант һөнәрен һайлаусыларҙың хәтере ни өсөн нығыраҡ үҫешеүен ғалимдар аңлата алмай. Һәр хәлдә, ниндәйҙер музыка ҡоралында уйнау, сәнғәт менән ҡыҙыҡһыныу кешенең аҡыл кеүәһен үҫтерә, был тикшеренеүҙәр ошоно дәлилләй.

■ Күптәр иртәнге ашты ашамай. Ғалимдар үткәргән тикшеренеүҙәр раҫлауынса, оҙайлы ваҡытҡа иртәнге аштан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Әйтеүҙәренсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итеп кенә ҡалмай, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота һәм шуға ла йөрәк сирҙәре һәм диабеттың үҫешенә юл ҡуймай. Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сәләмәт булыу өсөн иртәнге аштың әһәмиәте бик ҙур. Ғалимдар фекеренсә, ата-әсәләр балаларына яҡшы миҫал күрһәтергә һәм көндә файҙалы аҙыҡтан башларға тейеш.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Билдәле булыуынса, машиналар РМ10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр.

ХӘТЕРКИТАП

# ҠЫРҠ АЛТЫНСЫЛАР ХАҠЫНДА

**Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылында олпат йәштәрҙәге ике туған апайым Яманғолова (Һөйөндөкова) Сәйҙә Фазылйән ҡыҙы йәшәй. "Беҙ - ҡырҡ алтынсы йылғылар, атайҙарыбыҙ менән бергә һуғыштан ҡайтҡан кешеләрбеҙ", - тип әйткәйне бер мәл. Уның уйынлы-ысынлы әйткән был һүҙҙәре миңә фәлсәфи фекерләүҙәргә йүнәлеш бирҙе. Ысынлап та, уйлап ҡараһаң, бөтә Европаны йәйәүләп йә йүгереп, ҡай саҡтарҙа, әрме теле менән әйтмешләй, "по-пластунски" шыуышып, Ер шарын фашизм ҡоллоғонан азат итеп ҡайтҡан ир-егеттәрҙең һуғыштан һуң тыуған тәүге балалары бит улар. Ҡатындары дүрт йыл буйы "ут йотоп", Еңеү менән бергә зарығып көтөп алған яугирҙарҙың ҡырҡ алтынсы йыл тыуған гәзиздәре быйыл 80 йәшлек юбилейын билдәләй...**

Сәйҙә апайымдың атаһы - Һөйөндөков Фазылйән олатай хаҡында Йылайыр районында белмәгән-ишетмәгән кеше юҡтыр. Исҡужа ауылының һуңғы указлы муллаһы булған Һөйөндөков Шаһишәриф ҡартатайыбыҙҙың иң өлкән улы. Бала сағынан атаһының мәҙрәсәһендә уҡып белем алған ул. Граждандар һуғышы мәлендә ҡулға алынған Шәйехзада Бабичты ҡыҙылдарҙың Исҡужа ауылы аша Йылайырға алып китеп барған мәленең дә шаһиты булғанын һөйләгәйне бер мәл олатайым. Аҡмулланың күп шиғырҙарын яттан да уҡый ине ул.

Утыҙынсы йылдар аҙағында мулла балаларының йөрәгенән "иман" тигән нәмәне бөтөнләйгә ҡаҡҡылап төшөрөү маҡсатында төҙөлгән "тәрбиәүи-хеҙмәт" әрмеһе сафына алынып, өс йыл Алыҫ Көнсығышта хеҙмәт итә. Шундай махсус "тәрбиә" алып ҡайтыуына ҡарамаҫтан, бер ҡасан да шайтан ҡотҡоһона бирелмәй ул, иманына тоғро булып ҡала. Хәрби хеҙмәтен тамамлап ҡайтып, Сабира инәй менән тормош ҡора, әммә, яҡшы ғына йәшәп ятҡанда, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Шамил һәм Васил исемле ике малайын хәләл ефете ҡарамағына ҡалдырып, иң тәүгеләрҙән булып, фашист илбаҫарҙарына ҡаршы яуға китә. Бер нисә мәртәбә яралана, әммә, Аллаһы Тәғәлә уны һәр саҡ именаман ҡылып, ҡабаттан сафҡа баҫыуын насип итә. Илгә Бөйөк еңеү алып килгән меңәрләгән яугирҙарыбыҙ менән бергә тыуған ауылына ҡайтырға яҙған уға Раббыбыҙ. "Фазылйән ҡайнаға һуғыштан ҡайтышлай беҙгә, Мәмбәт ауылына һуғылып киткәйне. Намаҙ уҡығанда пилоткаһын башына арҡыры кейеп ала ине..." тип хәтерләй торғайны әсәйем.



Рядовой Ф. Һөйөндөков һуғыш мәлендә.



Хәләл ефете Сабира инәй менән.

Уның һуғышта алған һуңғы йәрәхәте хаҡында ла бәйән итеп китмәй булмай. Мин инде хәрби табип булып хеҙмәт итеп йөрөгән осоро, ялға ҡайтҡанымда, беҙгә ҡунаҡҡа килгәйне олатайым. "Улым, арҡама банка һал әле", тип мөрәжәғәт итте бер мәл. Күлдәген күтәреп, арҡаһын асҡас та, албырғап ҡалдым. Күкрәк ситлегенең уң яҡ ҡабырғалары бөтөнләйгә тиерлек юҡ ине. Култыҡ аҫтында ҡуш йоҙроҡ һыймалы өңшөйөп торған, тиреһе йөйҙәр менән ҡапланған соҡорҙоң тын алған һайын бәләкәсәйеп, берсә ҙурайып торғанын күреп, тәндәрем эҫеле-һыуыҡлы булып киткәйне. Немец снаряды ярсығы ана шундай тәрән йәрәхәт һалған икән...

Һуғыш ахыры етеп килгәндә алған шул яра тарихын ишетеп тетрәндем. Уҡсылар часында хеҙмәт итеп йөрөгән олатайым Берлин операцияһы алдынан дошман снаряды ярсығы тейеп, ауыр яраланған икән. Ҡаты алыш мәлендә яралы һалдаттарҙың күпләп йәрәхәтләнеүе, хатта һәләк булып ҡалыуҙары һәр һуғыш өсөн тәбиғи хәл. Ана шундай көндәрҙең берендә, ялан госпиталенә алып килгән яралы һалдаттар араһында Фазылйән олатайым да була. Яралыларҙы сортировка яһап, кемдәрҙең тәү йә икенсе сиратта ярҙам алырға тейешлеген аныҡлай башлайҙар. Иң ауыр йәрәхәтлеләре, әлбиттә, иң беренсе сиратта хирургия палатаһына оҙатыла. Госпиталгә алып килеп еткергәнсе, бәғзеләр йән биреп тә өлгөргән була шул, үкенескә. Ана шул саҡ, бөтөнләйгә аңын юғалтҡан Фазылйән олатайҙы ла, үлгән тип һанап, тиҫтәләгән башҡа мәйеттәр араһына һалғандар икән. Күпмелер ваҡыттан, сираттағы үлекте мәйетханаға (моргҡа) индергән мәлдә, бер санитар, ыңғырашҡан тауышты ишетеп, уны табып ала. Һалдаттың әле йәне сыҡмаған икәнлеге аныҡланғас, ҡабаттан госпиталь палатаһына алып киләләр. Хирургтар ашығыс рәүештә, шунда уҡ операция өҫтәленә һалып, әмәл итеп, ҡотҡарып алып ҡала. Олатайым аңына килгәс кенә был хаҡта хәбәрҙәр була. Һуғыш тамамланыу алдынан алынған ошо ауыр яра, бәлки, олатайымдың ғүмерен ҡотҡарып алыуға сәбәп тә булып торғандыр. Эвакогоспиталдән тыл госпиталенә, унан инде Махачкала ҡалаһындағы ҙур госпиталгә күсерелә. Һәр этапта тағы әллә нисә операция кисергән яугир Бөйөк еңеүҙе ана шунда ҡаршылай. Ә өйгә сентябрь айында ғына ҡайтып килеп етә. Киләһе, әлеге 46-сы йылдың июнь айында Сәйҙә апайым донъяға килә...

Беренсе дәрәжә Бөйөк Ватан һуғышы ордены һәм күп миҙалдар кавалеры, икенсе төркөм инвалиды булған олатайым, хаҡлы ялға сыҡҡансы, төрлө совхоз эштәрендә эшләй, ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу эшендә күп көс түгә. Дин ғилеменән тыш, донъяуи белемле лә булараҡ, һуңғараҡ, ауыл кибете асылғас, шунда һатыусы итеп ҡуялар.

Дин тигәндән, ошо хаҡта айырып әйтеп үтергә теләйем. Бала сағынан атаһының мәҙрәсәһендә, үҙе әйтмешләй, "боронғо уҡыу" буйынса яҡшы ғына белем алған олатайым ғүмер буйы дин юлында булды. Биш намаҙын, фарыз ураҙаларын бер ҡасан да ҡалдырманы. Ҡөрьән аяттары, Бәйғәмбәр (с.ғ.с.) сөннәтенә ярашлы доғалар ярҙамында һәр төрлө ауырыуҙарҙы дауалау серҙәрен дә белә ине. Ауылдағы мосолман кешеләре вафат булғанда йә сабыйҙар тыуыу айҡанлы дини йолаларҙы атҡарыуҙар менән генә сикләнмәне ул. Совет хөкүмәте тарафынан әллә ни хупланмауына ҡарамаҫтан, ауылдаштарын хаҡ дингә өгөтләүҙе һәр саҡ үҙенең изге бурысы тип һананы. Ул дәүерҙә мәсеттәр, дини китаптар бер ерҙә лә булмауы барыбыҙға ла мәғлүм. Ана шул осор олатайымдың үҙенең балаларына, туғандарына ҡалын дәфтәргә яҙып ҡалдырған васыятнамәһе әлегәсә һаҡланған. Ислам диненең биш терәге, иман шарттары хаҡында, намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу тәртибе, ҡорбан салыу тураһында бик йөкмәтеле бер китап итеп сығарырға ла булыр ине ул васыятты.

Сабира инәй менән олатайым 8 бала тәрбиәләп үҫтергән, барыһын да уҡытып, юғары белем биргәндәр. Балаларын аяҡҡа баҫтырып, туҡһанынсы йылдары бер-бер артлы ғына баҡый донъяға китте улар. Өлкән улдары Шамил, Васил ағайҙар, Сәлимә апай ҙа хәҙер инде гүр әйәләре. Сәйҙә апай, Сәлмән ағай хаҡлы ялда, Камил ағай һәм төпсөк ҡыҙҙары Хөснә - табиптар.

Иң башта иҫкә алған Сәйҙә апайым хаҡында бер аҙ айырып әйтеп китеүҙе кәрәк тип таптым. Ана шул инде атаһы менән бергә "Һуғышта йөрөп ҡайтҡан" ҡыҙы. Бөтә йәшлеген милләттәштәребеҙгә туған телебеҙ нескәлеген өйрәтеүгә бағышлаған, ҡырҡ йылдар самаһы мәктәптә балалар уҡытҡан мәғариф ветераны ул. Хәләл ефете Ғәлимйән еҙнә менән илтифатлы, эшсән ҡыҙҙар үҫтергәндәр. Еҙнәй вафат булғас, хәҙер ауылда кесе ҡыҙы менән йәшәй. Бирешергә иҫәбе юҡ "фронтовик" апайымдың, әлхәмдулиллаһ, ҡош-ҡорт аҫрай. Ошо арала, ин шәә Аллаһ, 80 йәш тула хөрмәтле апайыбыҙға.

Олатайымдың ике ейәне МХО-ла ҡатнаша ине. Әхмәр исемлеһе ике йыл элек батырҙарса һәләк булды, уны тыуған ауылына алып ҡайтып, хөрмәтләп ерләнеләр. Ә Гәзиз (Әхмәрҙең бер туған ағаһы) яу ҡырында хәрби бурысын үтәүен дауам итә. Күптәребеҙгә үрнәк булырлыҡ бына ошондай гүзәл ғаиләләр илебеҙҙә тағы ла күберәк булыуын, уларға ныҡлы иман, һаулыҡ, һәр изге эштәрендә уңыштар насип итһен Аллаһы Тәғәлә.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина хеҙмәте подполковнигы.**

✓ *Псковты үткәндә, һуғыш харабаларын, емерелгән ауыл-ҡалаларҙы күреп, иҫебеҙ китте. Шаярыуҙар бөттө, барыбыҙ ҙа ҡапыл үҙгәреп, етдиләнеп киткән һымаҡ булдыҡ.*



ХӘТЕРКИТАП

**"Эйе. Хәрби биографияны хәтерҙән үткәреп яҙып ҡуйыу бик мәслихәт. Хәтерҙән юйылғандары ла бихисап. Хәҙер миңә 80 йәш бит инде". Был минең: "Һуғыш тураһында яҙ, атай", - тигән тәҡдимемә атайымдың яуабы булды. Кем уйлаған, уның яҙғандары бөгөн васыят һымаҡ яңғырар, тип. Атайымдың бөхтәлеге шунда сағыла: яҙған әйберенә мотлаҡ башлаған һәм тамамлаған датаһын ҡуя. Уның вафатына быйыл июлдә 6 йыл була. Һуңғы саҡырылыш һалдаттары ла баҡыйлыҡҡа күсеп бөтөп бара. Йәндәре йәннәттә булһын уларҙың. Тыныс йоҡлаһындар...**

# ҺУҢҒЫ САҠЫРЫЛЫШ ҺАЛДАТТАРЫ



**Беҙ һуғышҡа барабыҙ.**

"Беҙҙең халыҡта электән бер йола бар: ололар иң тәүҙә ырыу-атың кем, эскән һыуың ниндәй, тип танышыр булғандар. Быны мин һеҙҙең алдығыҙҙа: тәүҙә ҡыҙыл армеец, һуңынан Совет Армияһы һалдаты. Европа илдәрен Гитлер ҡоллоғонан ҡотҡарыусы бер быуын вәкиле. 1927 йыл 15 июлдә Хәйбулла районының иң төпкөлөндә урынлашҡан Аҡъюл ауыл советы Урыҫбай ауылында тыуғанмын. 17 йәш тулғас, "досрочный призыв"ҡа эләгеп, 1944 йыл көҙөндә шул ауылдан армияға алынғанмын. Мин, Иҙелбаев Ғәлиаслан Ғәлиәскәр улы, һеҙгә ете йыл ғүмерем сарыф ителгән армия хеҙмәтемде иң беренсе көнөнән башлап һөйләргә булдым. Тыуған илебеҙ тарихында башҡа һуғыш-ҡанғойош булмауына өмөтөм ҙур. Һәр бер бала, йәш үҫмер үҙ мәле еткәнсе үҙ илендә, ата-әсәһе янында йәшәренә ысын күңелдән ышанам. Килер быуын армияға "досрочный призыв" тигән нәмәне күрмәһен, беҙ күргән улар башына төшмәһен, тигән теләктә ҡалам.

Беҙ 1927 йылғы йәш кенә егеттәр инек. Башҡортостан. Хәрби ҡаласыҡ Әлкә (Алкино) лагеры. Бында беҙҙе, йәш егеттәрҙе (17 йәшебеҙ тулып ҡына уҙған сағыбыҙ) 1944 йылдың октябрь аҙаҡтарында йәм-йәшелдән кейендереп, аяҡтарға обмоткалар уратып, ботинкалар кейҙереп, хәрби белемгә, хәрби алымдарға өйрәтә башланылар. Беҙҙе отделение, взвод, роталарға бүлделәр.

Йоҡлаған урыныбыҙ: ерҙән ҡаҙып эшләнгән землянкаларҙа өҫ ҡат итеп эшләнгән һәндерә-урындыҡтар. Беҙ, Һатыбалды тигән иптәшем менән өҫкә, 3-сө ҡатта урынлаштыҡ. Бесәй кеүек үрмәләп менеп китәһең. Өҫкө һәндерәлә уралған обмоткаң төшөп китһә, бер бәлә, ҡабаттан йомарлап урағансы, ваҡыт үтә лә китә. Аҫтағы ике һәндерәлә лә һалдаттар, мәшәҡәте ҙур. Ике-өс айҙа яйлап күнектек. Беҙ, башҡорт балалары, ашауға талымһыҙ инек, кәбеҫтә һурпаһына ғына өйрәнә алмай йонсоноҡ. Икмәкте, шәкәрҙе хатта артҡырып, төндә отбойҙан һуң ашарға кеҫәләргә йыйып та булыша инек. Махорка бирәләр ине. Беҙҙең йылғылар күбебеҙ тәмәке тартманыҡ. Тартҡандарға етмәгәндер, күрәһең, уны шәкәр-рафинадҡа алмаштырып бер була инек (үҙенә күрә, һалдат сауҙаһы инде).

Мин тәүҙә подъемға өйрәнә алмай бер булдым. Өйҙә әсәй: "Тор, балам", - тип әкрен генә уятҡан булһа, бында дежур дневальныйҙың: "Подъем!" - тип аҡырыуына күнегә алмай, тертләп уянып, ҡалтырап төшәм. Йәнәт кейенеп, ҡышҡы һыуыҡта ла, физзарядкаға тышҡа сығырға кәрәк ине. Шунан яйлап "Подъем"ға ла күнектем. "Подъем!" - тип ҡысҡырыуҙарынан бер 10-15 минут алда уянырға ғәҙәтләндем.

Иптәш бер взвод, бер отделение һалдаттары менән танышып, бер туғандай өйрәнешеп алдыҡ. Үҙебеҙҙең яҡ башҡорттар ла байтаҡ ине. Өфө яғы районДарынан татар, мари, мордва егеттәре татарса һөйләшәләр. Күбебеҙ русса белеп тә етмәйбеҙ. Бына бер заман беҙҙе сафҡа теҙеп, йырларға мәжбүр итә башланылар. "Белмәйбеҙ", - тип тәүҙә ҡыр талашып ҡараһаҡ та, аҙаҡтан төшкө ашҡа алып йөрөтөүсе кесе командирҙар "Запевай!" тип теңкәгә тейеп, ашханаға индермәй, плац буйлатып оҙаҡ йөрөтә башлағас, үҙебеҙсә йырларға булдыҡ. Йыр башлаусы беҙҙең отделениенан, хәҙерге Краснокама яғынан мари егете Пашаев Сәйфулла булды. "Запевай!" тигән команда булғас, әсе тауыш менән татарса йыр башланы:

*Казармаға кергән саҡта*
*Таптым патрон гильзаһын.*
*Унан беҙ ҡушылабыҙ:*
*Беҙҙең маршал Ворошилов*
*Йәшәһен! Йәшәһен!*
*Эскадрон, аттарға!*
*Рәтләп, тигеҙ сафтарға!*
*Беҙ барабыҙ фронттарға*
*Тыуған илде һаҡларға!*
*Алға! Алға!* - тип тә ҡысҡырабыҙ.

Быныһы инде тел белмәгән урыҫ һалдаттары өсөн шәп ине. Сафтан сыҡмайынса, урыҫса булмаһа ла, бик дәртле йырлап үтә башланыҡ. Ошоларҙы төшөнөп алғас, беҙҙе плац буйлап ҡыуыуҙы кәметтеләр. Иҫемдә, бер капитан, стройҙы туҡтатып: "А про что поют они?" - тип, алып барыусы сержанттан һораны. Ул: "Не могу знать, про Ворошилова, про казармы поют", - тине. Капитан: "Продолжайте, красиво получается", - тип баһа биреп ҡуйҙы беҙгә.

Занятиеларҙа күбеһен стрелковый ҡоралды, "Максим" пулемётын ныҡлап өйрәндек. Яҡшылап русса белмәһәк тә, ҡоралдың һәр өлөшө ҡайҙа, ниндәй хеҙмәт үтәй, нисә өлөштән тора икәнен һөйләп бирә алдыҡ. Тик ҡапыл һорау бирһәләр, төшөнә алмай ныҡ аҙаплandым. Уставты, патрульный службаны ла, уҡый белгәс, ятлап алам да, һөйләп тә бирәм. Молодец, тип кенә ҡуялар.

1945 йылдың ғинуарын шул лагерҙа ҡаршыланыҡ, өйрәндек тә инде. Хәрби хеҙмәттә ул ваҡытта иң йонсотҡаны, ҡурҡытҡаны - противогаз-маска кейеп, газ ебәрелгән землянкаларҙы үтеп сығыуҙар. Сөнки противогаздар иҫке, йыртыҡтары ла бар, газ үтеп, үпкәгеҙҙе зарарлаһағыҙ, үҙегеҙгә ҡарап үпкәләгеҙ, ҡабаланмай, яҡшылап кейегеҙ, тиҙәр командирҙар. Үҙҙәре: "Быстрей, быстрей!" - тип торалар. Ярай, унынһын да үттек.

Алты ай буйына Әлкәлә тейешле хәрби әҙерлек үткәндән һуң, 1945 йылдың 19 февралендә хәрби ант бирҙек. Присяга ҡабул иткәс, беҙҙе көнбайышҡа, фронт яғына ыңғайлатырға булдылар.

Ул ваҡытта беҙҙең армия "Ҡыҙыл Армия" тип йөрөтөлдө, Гитлерҙың вассалдары булған хәрби союздаштар территорияһына сыҡҡас, Совет Армияһы тип атала башланы.

Хәҙер беҙ - совет һалдаттары! Политруктар: "Ғәскәребеҙ сит ил территорияларына азат итеү походы менән бара. Беҙ халыҡтарҙы Гитлер ҡоллоғонан ҡотҡарыу өсөн фашистарҙы тамам тармар иткәнсе һуғыш барасаҡ. Гитлерсылар үҙ ерҙәрендә беҙҙең Армияға ныҡ ҡаршылыҡ күрһәтә. Ләкин улар еңелеүгә дусар ителгән: 2-се фронт асылды. Дошман ике яҡтан ҡыҫымға алынды - теге яҡтан Англия, Америка ғәскәрҙәре, был яҡтан беҙҙең Совет Армияһы һөжүм итә", - тинеләр.

Эшелондарға тейәнеләр. Беҙгә, малайҙарға, ҡыҙыҡ та, борсолдора ла. Йәнәһе, ил күрәбеҙ, тип ҡыуанғандар ҙа бар. Беҙ барғансы, һуғыш бөтөп ҡуйыр, тип борсолғандар ҙа бар.

Совет Армияһы был көндәрҙә сит илдәр биләмәләрендә фашистарҙы тармар итеү буйынса ҡыҙыу һуғыш алып бара. Шуғалыр ҙа, беҙҙе, малайлыҡтан яңы сыҡҡан 17-18 йәшлек егеттәрҙе, тура ут эсенә алып барып тыҡманылар. Февраль айының аҙаҡҡы көнөндә беҙҙе Татищево тигән хәрби лагерға төшөрҙөләр. Бындағы землянкалар Әлкәләге һымаҡ түгел, тәрәнерәк ҡаҙылған, баҡһаң, ерҙәре ҡомлоҡ икән. Улар яңыраҡ ҡына бушаған, беҙҙән алдағыларҙы (25-26 йылғылар булһа кәрәк) көнбайышҡа, фронтҡа оҙатҡандар.

Лагерҙа беҙҙе оҙаҡ тотманылар, Саратовтан 25 км-ҙа урынлашҡан Курдюм тигән ауылға күсерҙеләр. Һәр отделение һалдаттарын айырым өйгә урынлаштырҙылар. Бында тактик занятиеләр башланды. Совет армияһы һөжүм итеү һуғышы алып бара, тип, беҙҙе дошманға һөжүм итергә өйрәтә башланылар. Йүгерттеләр генә. Бер ай самаһы бында булғас, кире Татищевоға килтерҙеләр.

Март урталарында фронтҡа оҙаталар, тигән хәбәр таралды. Бында беҙҙе өряңынан кейендерҙеләр (союзниктар ярҙамын үҙебеҙҙә тойҙоҡ): еңел йәшел "английский" шинелдәребеҙҙе систереп, беше күкшел "американский" шинель кейҙерҙеләр. Ботинкаға обмотка урынына гетры тигән ойоҡ һымаҡ бер нимә бирҙеләр. Гетрыны анһат, кейәһең дә, бәйләп, йәрпесәк һымаҡ ботинка тышына төшөрөп ҡуяһың. Обмотка урап ултырыуҙар бөттө.

Смотр үткәс, март аҙаҡтарында эшелондарға тейәп, көнбайышҡа оҙаттылар. Был юлы инде беҙҙе хәрәкәт итеүсе Армия составына 3-сө Украина фронтына ебәрҙеләр. "Дошман бик хәлһеҙләндерелгән. Һеҙ сит илдәрҙә хәрәкәт итәсәкһегеҙ. Совет яугире намыҫына тап төшөрмәгеҙ! Уяу булығыҙ!" - тип оҙатып ҡалдылар. Беҙҙе бик аҡрын, төндә генә алып киттәләр ине. Бик оҙаҡ барҙыҡ. Псковты үткәндә, һуғыш харабаларын, емерелгән ауыл-ҡалаларҙы күреп, иҫебеҙ китте. Шаярыуҙар бөттө, барыбыҙ ҙа ҡапыл үҙгәреп, етдиләнеп киткән һымаҡ булдыҡ.

**Зифа ИЛБАҠТИНА.**
**Сибай ҡалаһы.**
**(Дауамы бар).**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Шаҡылдаҡ**
**(Луговой чекан)**



Шаҡылдаҡтар - турғай һымаҡтар ғаиләһенә ҡараған тағы бер төркөм. Бик ваҡ ҡына ҡоштар, аяҡтары оҙон, ҡойроҡтары ҡыҫҡа. Иңендә аҡ һыҙаты бар. Яландарҙа, далала йәшәй. Ояһы ерҙә, 3-6 йомортҡа һала, йомортҡаһы йәшкелт-зәңгәр, ҡайны саҡта ҡоро таплы, йылтырап тора.

Ялан шыҡылдағының арҡа өлөшө ерәнерәк, буй-буй һыҙаттары бар, тамағы, түше алһыу, ҡорһағы асыҡ төҫтә. Инә һәм йәш ҡоштар ата ҡош һымаҡ сағыу түгел. Бик йыш осрай торған ябай ҡош.

**Ҡарабаш шаҡылдаҡ**
**(Черноголовый чекан)**



Ата ҡоштоң башы, тамағы, арҡаһы, ҡанаттары һәм ҡойроғо - ҡара, түше - ерән, ҡорһағы, ҡойроғоноң өҫкө яғы һәм муйынындағы ике табы аҡ төҫтә. Инә ҡоштоң арҡа өлөшө һоро сыбар, әммә ялан шаҡылдағынан айырмалы рәүештә, ҡойроғоноң өҫкө яғы ла ап-аҡ, ә башы тулыһынса ҡара.

Бейек үлән баҫҡан яландарҙы, бейек тауҙарҙы, далаларҙы үҙ итә. Әммә Рәсәйҙең Европа өлөшөндә бик һирәк осрай торған ҡош.

П.П. Сушкин (1897) ҡарабаш шаҡылдаҡты Өфө тирәһендә, Шиңгәккүлдә осратҡанын яҙып ҡалдырған. А.Н. Карамзин (1911) уны элекке Бәләбәй өйәҙенең көньяҡ-көнбайыш өлөшөндә оя ҡороп йәшәүсе ғәҙәти ҡоштар рәтенә индергән. В.Д. Ильичев, В.Е. Фомин (1988) мәғлүмәттәренә ярашлы, Урал арьяғында йыш осраған ҡоштар иҫәбенән һәм ул ярҙайын тал һәм бейек үлән баҫҡан йылға һәм күлдәр ярҙарында, шулай уҡ Таналыҡ йылғаһынан алып Яйыҡ һәм Уй йылғалары башланған ерҙәргә тиклемге арауыҡтағы ҡыуаҡлыҡтар араһында, Йылайыр платоһының урмандарында, Һаҡмар йылғаһы үҙәнендә, Ирәндек, Ҡырҡты һәм Уралтауҙа бик йыш осрай һәм ул унда оя ҡороп йәшәй. Беҙ иһә был ҡошто 2006 йылда Баҡалтай районында урынлашҡан Ҡарлыхан заказнигында күрҙек. Бейек үлән араһында урынлашҡан ояһында йәш бәпкәләре лә бар ине.

Шайылдаҡтар тураһында һөйләгәндә, уларҙың тағы бер төрө - ҙур шаҡылдаҡ тураһында әйтеп китергә кәрәк. Гельминтолог Э.М. Матевосян (1938) Стәрлетамаҡ тирәһендә ҙур шаҡылдаҡты тотоуы тураһында белдерә. Ә был төр Урта һәм Көньяҡ Азияла ғына йәшәй. Беҙ иһә ғалим ҡарабаш шаҡылдаҡты тотҡандыр тигән фекерҙә, сөнки улар ныҡ оҡшаш.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# САЛАУАТТЫ КЕМДӘР ҺЫНЛАНДЫРА?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**21-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡоҙа. Ҡоҙағый. Ҡыҙ. Бажа. Балдыҙ. Ҡәйнә. Инәй. Апһын. Атай. Набат. Ул. Ҡеүә. Ағай. Еңгә. Орск. Әҙ. Раа. Көҙ. Ығыш. Ҡайны. Әсә. Еҙнә.

**Вертикаль буйынса:** Ҡайнаға. Ҡәйенбикә. Әсетке. Ҡаҙ. Өләсәй. Бриг. Ҡоҙаса. Әр. Уҡ. Ала. Ат. Алйот. Апай. Арыш. Наян. Борай. Йоласы. Ҡусты. Дары. Ҙур. Ҡәйнеш.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

## Эс китһә

❖ 100 грамм йөҙөмдө ит турағыстан үткәреп, шуға ҡәһүә тартҡыстан үткәрелгән 2-3 ҡалаҡ етен орлого онон, 100-әр грамм бал һәм зәйтүн майы ҡушырға. Һыуыткыста һаҡларға, кис йоҡлар алдынан шул ҡатнашманы 1 балғалаҡ ҡабып, артынан әҙ генә ҡайнаған һыу эсергә.

## Аңҡау ауыртһа…

❖ Аңҡау ауыртһа, пародонтоз булһа, дарыуханала һатыла торған дегетте иртән һәм кисен ауыртҡан ерҙәргә һөртөгөҙ. Бер аҙ яндырыр, әммә 2-3 көндән ауыртыу бөтөр, сөнки дегет микроб-фәләнде тиҙ үлтерә.

## Быуындар һыҙлағанда

❖ Бер ус ваҡлап туралған мәтрүшкәне ярты литр зәйтүн йәки көнбағыш майына һалып, 8-10 сәғәт тонәтергә, һөҙөргә һәм ауыртҡан ергә һөртөргә.

❖ 500 грамм һары мәтрүшкә сәскәләрен йәки үләнен ярты литр аҡ шарап һәм 1 литр үсемлек майына һалып 3 көн тоторға. Шунан һуң һүрән утта шарапты парға әйләндерергә, 2-3 аҙна ҡараңғы урында тотҡас ҡына ҡулланырға. Май ҡуйы ҡыҙыл төҫтә булырға тейеш.

## Гайморит

❖ Эмаль кәстрүлгә 1-әр балғалаҡ үгәй инә үләне япрағы, һуҡыр кесерткән һәм эвкалипт һалып, өҫтөнә 2 стакан ҡайнар һыу ағыҙырға, ҡапҡасын ябып 20 минуту төнәтергә, һөҙөргә. Ярты стаканын айырып алып, йылытып, көнөнә 3 тапҡыр 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Кәстрүлдә ҡалған төнәтмә өҫтөнә эйелеп, яҡшылап томаланып, бер ауыҙ, бер танау менән тын алырға. Быны көнөнә 2 тапҡыр 3-5 минут яһарға. Дауаланыу курсы - 12 процедура.

## Арпа сыҡһа…

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, үҙегеҙ тағып йөрөгән алтын алҡа менән ышҡығыҙ.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**19 июнь "Киске табын"** (М.Кәрим, И.Ҡаҙаҡбаев). 16+

**22 июнь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури, А. Абушахманов, инсц. Ш. Ғилманова), трагедия. 18:00. 16+

**22 июнь "Яратам, тип әйтеп өлгөрмәнем"** (Г. Ғиззәтуллина, А.Абушахманов), кинодрама. 19:00. 12+

**25 июнь "Кейәүҙәр"** (Х.Вәхит, Ф.Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

## М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 июнь "Конек-Горбунок"** (П.Ершов, В. Хрущев), әкиәт. 11:00. 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**20 июнь "Царевна-лягушка"** (Ж. Кусаинова), рус халыҡ әкиәте. 12:00. 0+

**23 июнь "Путешествие в театр кукол".** 12:00. 0+

**24 июнь "Путь Победы"** (Д. Ғәрәева, К. Баязитова). 12:00. 6+

**25 июнь "Здравствуй, мир театра кукол!".** 12:00. 0+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**23 июнь "Игеҙәктәр"** (Ә.Атнабаев), музыкаль комедия. 13:00. 6+

## БР Милли музейы

**19 һәм 20 июнь "Ашыҡ"** башҡорт халыҡ уйыны. 12:00. 0+

**19 июнь "Быль огненных лет..."** Бөйөк Ватан һуғышы башланыуға 85 йыл айҡанлы тематик экскурсия. 15:00. 12+

**20 июнь "Сыуаш сигеүе"** оҫталыҡ дәресе. 12:00. 6+

БЫЛ -ҠЫҘЫҠ!

# БАШҠОРТОСТАНДА НИСӘ АЙЫУ БАР?

**Республикала ҡырағай йәнлектәр һанын иҫәпкә алғандар.**



Һуңғы 10 йылда мышы - 22,5 меңдән 36,5 меңгә, себер ҡоралайҙары - 21 меңдән 37 меңгә, һеләүһендәр - 300-ҙән 1300-гә, бурһыҡтар - 5800-ҙән 10 меңгә, үрғуйҙар - 9500-ҙән 14 меңгә, урман һыуһарҙары - 4700-ҙән 7300-гә, һыу ҡомағы - 9400-ҙән 24 меңгә, бүреләр 468-ҙән 870-кә тиклем артҡан.

"Беҙҙә айыуҙар күп - 2733 баш, ҡондоҙҙар - 17 мең. Аҡҡоштар (15,5 мең) һәм аҡ ҡуяндар (29 меңгә яҡын) бер кимәлдә ҡала, төлкөләр - 9800 самаһы", - ти тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Нияз Фазылов.

Шул уҡ ваҡытта ҡабандар һаны һиҙелерлек кәмегән: 8700 баштан 2200 башҡа тиклем. Был - осраҡлы түгел, ә суҫҡаларҙың Африка тағунын (чумаһын) булдырмау буйынса маҡсатлы эш алып барыу һөҙөмтәһе.

Иҫәпләү өсөн белгестәр 28 мең квадрат километр самаһы ерҙе тикшергән. Алынған мәғлүмәттәр ҡырағай хайуандарҙы аулауға лимит һәм квоталар билдәләү өсөн кәрәк, ти ведомство белгестәре.

**✓ Ижадҡа битараф булмаған ошо балаларҙы ҙур, матур студияға туплап, улар менән йыл буйы йәнле эш алып барыла. Актерлыҡ оҫталығы, ҡурсаҡ йөрөтөү, ҡурсаҡ эшләү, стенография, сәхнә теле, вокал, режиссура буйынса шөғөлләнәләр.**



ИЖАДСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ЗАМАН ТАЛАП ИТКӘНСӘ

**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының "Мәҙәниәт" милли проекты буйынса реконструкцияланыуы тормошобоҙҙа көтөп алған ҙур бер ваҡиға булғайны. Бинаны төҙөү-яңыртыу эше ике йыл дауам итеп, уның дөйөм майҙаны ике тапҡырҙан ашыуға - 2,5-тән 6,4 мең квадрат метрға тиклем арттырылды. Бөгөн беҙ ҙур ҡәнәғәтлек менән, коллектив заман талабына ярашлы эшләй һәм ижад итә, тип әйтә алабыҙ. Театр үҙенең ижади эштәре менән Рәсәйҙә яҡшы билдәле, ул төрлө сараларҙа әүҙем ҡатнашып, призлы урындар яулай һәм тағы ла ҙурыраҡ проекттар өҫтөндә эшләй. Быйылғы миҙгел дә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры өсөн уңышлы булды. Ошо уңайҙан беҙ театрҙың директоры Альберт ИМАМЕТДИНОВҡа өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Альберт Альфред улы, быйылғы миҙгел театр өсөн нимәһе менән үҙенсәлекле булды?**

- Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының 94-се миҙгеле әле дауам итә. Уны рәсми рәүештә 27 июндә ябасаҡбыҙ. Быйылғы йылыбыҙ, гәҙәттәгесә, төрлө-төрлө сағыу ваҡиғаларға бай булды. Иң ҙур эштәребеҙҙең береһе - беҙ А. С. Пушкиндың "Руслан һәм Людмила" мюзикл-спектаклен оло сәхнәгә сығарҙыҡ. Интерактив кесе залда Бөйөк Ватан һуғышында еңеүҙең 81 йыллығына арналған "Еңеү юлы" тип аталған спектаклдең премьераһы үтте. Әлеге көндә ололар өсөн Александр Островскийҙың "Не все коту масленица" спектакле өҫтөндә эш алып барыла. Уның премьераһы сентябрҙә буласаҡ. Шулай уҡ балалар өсөн "Ун ике миҙгел" тип аталған спектаклдең премьераһы буласаҡ.

Фестивалдәргә килгәндә, Ҡаҙанда "Шомбай-фест" тип аталған VI халыҡ ара фестивалдә ҡатнашырға торабыҙ. Быйылғы миҙгелдә беҙҙең ҙур ҡаҙаныштарҙың береһе - Михаил Булгаковтың "Йәш табиптың яҙмалары" тигән хикәйәләре шәлкеменә нигеҙләнеп эшләнгән "Мысыр ҡараңғылығы" спектакле менән театрыбыҙ "Алтын битлек" фестиваленең финалына барып етте. Беҙҙең Ҡурсаҡ театры унда биш театр менән бәйге алып бара. Егерменсе июндә ошо фестивалгә йомғаҡ яһалып, унда еңеүселәрҙең исемдәре аталасаҡ. Әйтергә кәрәк, илебеҙҙең танылған театрҙары менән бергә финалға барып етеүебеҙ - беҙҙең өсөн үҙе үк ҙур еңеү.

Реконструкция эшләнгәндән һуң, Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында бик күп проекттарҙы тормошҡа ашырырға мөмкинлек тыуҙы. Һуҡыр йә насар күргән кешеләр өсөн тифлокомментирование буйынса спектаклдәрҙең һаны бермә-бер артты. Беҙ уны Грант отоп тормошҡа ашырҙыҡ, ике һөнәрҙәшебеҙҙе Мәскәүгә ебәреп уҡытып алып, шундай ҙур, яуаплы эште башлап ебәрҙек.

Шулай уҡ киске репертуар өҫтөндә эш алып барыла. Беҙҙең маҡсат - ололар өсөн спектаклдәрҙең исемлеген киңәйтеү. Балалар студияһы уңышлы ғына эшләй. Яңы миҙгелдә студияла балаларҙың һанын тағы ла арттырырға ниәтләйбеҙ. Был йәһәттән әле реклама алып барабыҙ. Шулай уҡ сәнғәт институты менән бәйләнеште ныҡытабыҙ: артистарыбыҙ, рәссамдарыбыҙ, режиссерҙарыбыҙ унда өҫтәмә һөнәри белем алалар. Тағы ла мөһим бурыстарҙың береһе - ҡурсаҡ театры белгестәре, студия уҡытыусылары театр менән ҡыҙыҡһыныусылар өсөн өҫтәмә һөнәри белем алыу курстары әҙерләй, яңы миҙгелдә ошо юҫыҡта эш көсәйтергә тип торабыҙ.

Күп кенә хеҙмәткәрҙәребеҙ был миҙгелдә үҙҙәренең белемдәрен камиллаштырҙы. Ошо алған белемде ҡулланып, тамашасыларға яңы проекттарҙы тәҡдим итеү өҫтөндә баш ватабыҙ ҙа инде. Ысынлап та, театр реконструкциянан һуң тамашасыларын бик йыш ҡыуандырып тора.

**➔ Балалар студияһы эшләй, тинегеҙ. Унда кемдәр шөғөлләнә?**

- Студияға мәктәп уҡыусылары, төрлө йәштәге балалар йөрөй. Улар менән беҙҙең ҡурсаҡ театрында эшләгән режиссерҙар, артистар, рәссамдар шөғөлләнә. Балалар беҙ биргән иғлан буйынса киләләр, дөрөҫөрәге, ата-әсәләре иң башта беҙҙең менән бәйләнешкә сыға, шулай килеп табалар. Ижадҡа битараф булмаған ошо балаларҙы ҙур, матур студияға туплап, улар менән йыл буйы йәнле эш алып барыла. Актерлыҡ оҫталығы, ҡурсаҡ йөрөтөү, ҡурсаҡ эшләү, стенография, сәхнә теле, вокал, режиссура буйынса шөғөлләнәләр. Быйыл хатта балаларҙы сәхнәгә сығарҙыҡ, улар театрҙың Яңы йыл спектаклдәрендә лә ихлас ҡатнаштылар. Әлбиттә, үҙҙәре өсөн ҙур, бай ғына тәжрибә тупланылар.

**➔ Ҡурсаҡ театры башҡа театрҙар кеүек үк гастролдәргә сығамы? Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының үҙенсәлеге лә бар бит, тамашасының уны нисек ҡабул итеүен дә белге килә.**

- Эйе, беҙ ҙә башҡа театрҙар кеүек үк, республика буйынса ла, Рәсәйҙең төрлө төбәктәре буйынса ла гастролдәргә, фестивалдәргә сығып йөрөйбөҙ. Фестивалдәр йыш үткәрелмәй, кварталға бер-ике тапҡыр булыуы мөмкин. Гастролдәр иһә йышыраҡ була. Ғәҙәттә, уның планы алдан уҡ төҙөлә.

Тамашасы тамашасы инде ул. Хәйер, үҙенең театры булған төбәктәрҙә тамашасы инде театрға күнеккән була, шуға, бәлки, башҡа яҡтар менән сағыштырғанда, уны тынысыраҡ та ҡабул итәләр. Ә бына ҡурсаҡ театры булмаған урындарҙа, ысынлап та, беҙ килгәндә һиуһап көтөп алалар.

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрында төрлө йәштәге актерҙар эшләй, сөнки һәр спектаклгә лә төрлө йәштәге, төрлө тәжрибәле артистар кәрәк. Ғөмүмән, ҡурсаҡ театры артистарын "универсалдар" тип атарға кәрәк - улар балалар өсөн дә, ололар өсөн дә ҡурсаҡтарҙы йөрөтә белергә, тауыш менән эшләргә, оҫта итеп хәрәкәт итергә, шулай уҡ мауыҡтырғыс итеп ролдәрен башҡарып, уларҙың күңелдәренә үтеп инергә тейештәр. Алда беҙҙе тағы ла мөһим ваҡиға көтә. 2027 йылда ҡурсаҡ театрына 95 йыл тула. Юбилей йылына әҙерлекте алдан алып барабыҙ. Уңыш-ҡаҙаныштарыбыҙ ҙа етерлек. Беҙҙең аҡһаҡалыбыҙ Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Айрат Әкрәм улы Әхмәтшин үткән миҙгелдә "Алтын битлек"тең "Театр сәнғәтенә индергән ҙур өлөшө" тигән махсус премияһына лайыҡ булды. Был беҙҙең "Алтын битлек"тә беренсе ҙур еңеүебеҙ ине. Йәнә лә Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 2027 йылда үтәсәк "Курсаҡфест" икенсе халыҡ-ара ҡурсаҡ театрҙары фестиваленә етди әҙерләнә.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА әңгәмәләште.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҮҘЕҢӘ ТЕЛӘМӘГӘНДЕ...

## башҡаларға ла теләмә

Һалмаңды һалма һалҡын һыуға - төшөп китер төбөнә, ҡыҙыңды бирмә яҡын ауылға - илап килер үҙеңә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кеше тау юлы буйлап килә ятһа, ҡаянан таш емерелеп төшөп, уның аяғын яралай. Кешене уның аяғының яраланыуы ҡурҡытмай, ул уның ауыртыуын һиҙмәй ҙә хатта. Ул шул тиклем яҡындан үлемде күрә, һәм был уны тетрәтә. Кешенең үлем тураһында уйлаған, һөйләгән саҡтары була, ләкин уны былай яҡындан күрергә тура килмәй. Ә был юлы ул үлем менән йөҙмә-йөҙ осраша. Кеше шул тиклем дәрәжәлә тетрәнеү кисерә - аяҡтары таштай ауырая, тәне ҡалтырай, аҡылы томалана һәм ул өйөнә көскә ҡайтып йығыла. Шунан кеше Хоҙайға мөрәжәғәт итә:**

**- Хоҙайым, үлемдән арала мине, зинһар, - ти ул. - Уның йөҙө лә, һулышы ла ҡурҡыныс. Мин әле йәшмен, Һинең хаҡыңа ижад итә, файҙалы эштәр башҡара алам...**

**- Һин ҡасандыр минән үҙеңдең яҡындарыңа: балаларыңа - аҡылһыҙлыҡтары өсөн, ата-әсәңә - ҡартайып, ҡарыуҙары ҡайтҡан өсөн, дошмандарыңа - һине эҙәрләгәндәре өсөн үлем ебәреүҙе үтендең, - тигән Хоҙай. - Ошо һиңә ҡамасаулаусы яҡындарың яҡты донъяны ҡалдырһа, хәстәрлек йөгөнән арынырмын да, бар көсөмдө ижадҡа бирермен, дошмандарыңдан ҡотолһаң, әле донъяла бер кем күрмәгән ниҙер ижад итермен, тип уйлаының. Яҡындарыңа, дошмандарыңа үлем теләгән өсөн дә бирелә бит һиңә был һынауҙар һәм ғазаптар. Һин тәүҙә ошо гонаһтарыңды аҡларға, шунан ғына ижад менән шөғөлләнергә тейешһең. Ә үлемде мин һиңә әҙер булмаған кеше өсөн ул ниндәй ҡурҡыныс икәнен белгертер өсөн күрһәттем. Һин бит үҙ-үҙҙәренә үлем теләмәгән, уны көтмәгән кешеләргә үлем теләнең. Кем был тормошта гонаһлы, кем гонаһһыҙ, кем күберәк файҙа, кем зыян килтерә, кемгә йәшәргә, кемгә үлергә икәнен һин хәл итмәйһең. Үҙеңә теләмәгәнде башҡаларға ла теләмә, юҡһа, үҙеңдең уйҙарың һәм теләктәрең менән тулы булған, төбөндә үҙең үк булдырған ағыу яткан һауыттан эсергә тура киләсәк. Башҡалар ғүмеренә саҡ ҡына булһа ла яҫҡынған кеше минең фатихамды ала алмаясаҡ...**

**Кеше тәрән уфтана. Ул ҡапыл шуны аңлай: ғүмерендә юғалтыу түгел, ә Хоҙайҙың ышанысын юғалтыу ҡурҡынысыраҡ икән.**

**Хоҙайға илткән юлда үҙеңә ҡамасаулаусы кешеләрҙе түгел, ә таштарҙы ситкә алып ташла. Ташты алып ташлау - уны урынынан ҡуҙғатыу ғына, ә кешене алып ташлау - уны ғүмеренән яҙҙырыу ул".**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ02-01885, 30 июль 2025 йыл.

1 582218 911006 26024

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
**"Башкортостан Республикаһы" Нәшриәт йорто" акционерҙар йәмғиәте типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (347) 226-99-48.**
ИНН 027806697, КПП 027801001
(450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99
**Матбуғат таратыу** 252-39-99
**График буйынса ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 18.06.2026 й. 17 сәғәт 00 мин.
**Ҡул ҡуйылды -** 18.06.2026 й. 14 сәғәт 30 мин.
**Баҫылып сыҡты -** 19.06.2026 й.



«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.



«Киске Өфө»нөң индексы — **ПР905**
Тиражы - 2677
Заказ - 1060